ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12-18 июнь (һөтай) 2021

№24 (962)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Иғтибар! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә 17 июнгә тиклем ташламалы хаҡ менән - 619 һум 08 тингә яҙылырға мөмкин. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға эйә буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.***

***Мөхәррирнәт.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мәғрифәт - ҡанатлы ат,** уны нисек сикләмәк кәрәк? 3



**Тарихы - бер быуатлыҡ,** талаптар ғына заманса 8-9



**Һәр башҡорт оҙон көй башҡарһа,** тарихы юғалмаясаҡ, киләсәге лә буласаҡ! 10-11



**Ысын башҡорт байрамы ул!** 12-13



ТВ-программа 14

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Башҡорт йәмәғәтселеге Өфө ҡалаһының 450 йыллығына ниндәй төҙөлөштәр күрергә теләй?

***Эльвира АЙЫТҠОЛОВА, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе:*** Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының былтыр декабрҙә үткән йомғаҡлау ултырышында ҡабул ителгән ҡарарға Өфө ҡалаһының юбилейы айҡанлы Башҡорт ҡалаһы "Өфө-II" ҡаласығының музейын булдырыу мәсьәләһе лә индерелде. Ҡоролтайҙың тәүге рәйесе, арҙаҡлы милләттәшебеҙ һәм билдәле археолог Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов был идеяны үҙе иҫән саҡта уҡ күтәргәйне, ләкин ул төрлө сәбәптәр арҡаһында кисектерелә килде, тормошҡа ашманы. Шуға, Нияз Мәжитов исемендәге "Өфө-II" ҡаласыҡ-музейы мотлаҡ төҙөлөргә һәм ул халыҡ-ара кимәлдә булырға тейеш, тигән фекерҙәбеҙ.

Икенсенән, башҡорт халҡының милли уйын ҡоралы булған һәм бары тик Башҡортостан территорияһында ғына үҫкән ҡурайға һәйкәл ҡуйылыуы мотлаҡ. Әлеге ваҡытта энтузиастарҙың эшмәкәрлеге менән генә ҡурайға һәйкәл ҡуйыуҙа өлгөрөп еткән мәсьәлә, сөнки ҡурай бал, ҡымыҙ, башҡорт аты, башҡорт халыҡ йыры менән бер рәттән, Башҡортостан бренды булып тора.

Өсөнсөнән, "Урал легендалары" тип аталған проектты тормошҡа ашырыу зарур. Уны Ҡоролтайҙың бер төркөм егеттәре эшләне һәм ошо проектҡа ярашлы, аэропорттан 7 километр ситтәрәк ҙур туристик комплекс төҙөлөргә тейеш. Уның маҡсаты - туристарҙы халыҡ ижадына нигеҙләнгән объекттар аша йәлеп итеү, йәғни "Урал легендалары" - "Урал батыр" эпосынан алып башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында булған башҡа легендалар, риүәйәттәр, әкиәттәр, йырҙар, ҡобайырҙар һәм уларҙың геройҙары аша һүрәтләнәсәк маршруттың башы булып тора. Йәғни ул - ял итеү, туризмды үҫтереү менән бер рәттән, тарихты, ауыҙ-тел ижадын һәм шәжәрәләрҙе өйрәнеүгә булышлыҡ иткән мәҙәни-мәғрифәт үҙәге. Шуға күрә төрлө саралар үткәрергә конференц-зал да булырға тейеш тип күҙаллайбыҙ. Баш ҡалаға килеүсе туристар иң тәүҙә ошонда ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәт алып, шунда уҡ үҙҙәренә оҡшаған маршрутты һайлап, артабан республиканың төрлө тарафына таралып китергә тейеш.

Беҙҙең ошондай өс йүнәлештәге проекттар бар, улар әҙер һәм баш ҡаланың юбилейы менән бәйле тормошҡа ашырылһа, бик шәп булыр ине.




## АФАРИН!

# ҺАУМЫ, ҺАУМЫ, ӘКИӘТ!

**Ошо көндәрҙә Өфөнөң И. Якутов исемендәге паркында кескәйҙәр һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн күркәм байрам сараһы - "Һаумы, һаумы, әкиәт!" төбәк-ара конкурсын йомғаҡлау тантанаһы уҙҙы. Бала күңелендә туған телгә, халҡының ауыҙ-тел ижадына һөйөү тәрбиәләгән, рухын байытҡан конкурс быйыл Бөтә донъя фольклориадаһына бағышланды.**




*I урын алыусы Зөлхизә Юлдашбаева.*

"Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы бынан теүәл 12 йыл элек ҡала башҡорттарын кескәйҙән туған телен белеп үҫергә дәртләндереү, башҡорт мәғариф учреждениеларында эш һөҙөмтәһен сағылдырыр ижади майҙансыҡ булдырыу маҡсатында баш ҡаланың вайымлы мәғариф хеҙмәткәрҙәре тырышлығы менән барлыҡҡа килгәйне. Тәүге йылдарҙан уҡ ул ысын мәғәнәһендә башҡорт теле байрамына әүерелде - балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре, мәктәп уҡыусылары төрлө халыҡтар әкиәттәрен саф башҡортса башҡара ине. Бына хәҙер, ярыш төбәк-ара кимәлгә күтәрелгәс, ойоштороусылар һәр кемгә үҙ туған телендә әкиәт һөйләү, уны сәхнәләштереү форсатын биргән. Шуға быйыл балалар башҡорт теленән башҡа, Рәсәй халыҡтарының башҡа телдәрендә сығыш яһаған. Баһалама ағзалары барлығы 347 видеояҙма ҡараған. Конкурста Башҡортостандан ғына түгел, оло илебеҙҙең башҡа төбәктәренән дә балалар "Яңғыҙ башҡарыусылар", "Әкиәтте сәхнәләштереү", "Мультипликацион һәм анимацион фильм" номинацияларында ихлас ҡатнашҡан.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

**✓ Баш ҡалала Урал батыр һәйкәле булырға тейеш тип иҫәпләйем. Был теманы бынан бер нисә йыл элек Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы күтәреп сығып, хатта Урал батыр һәйкәленә конкурс иғлан иткәйне.**



АФАРИН!

# ҺАУМЫ, ҺАУМЫ, ӘКИӘТ!

**(Башы 1-се биттә).**

Яңғыҙ башҡарыусылар араһында Әбйәлил районы Амангилде ауылы "Ҡарлуғас" балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Әзизә Даушева шағирә Гүзәл Ситдиҡованың "Аҡколаҡ менән Һаҡколаҡ" тигән шиғри әкиәтен бик оҫта һөйләп, Гран-при яуланы. Ә бына мәктәп уҡыусылары араһында ошо уҡ наградаға Өфөнөң 28-се коррекцион мәктәп-интернатынан Анна Гусева лайыҡ булды. "Әкиәтте сәхнәләштереү" номинацияһында Федоровка районы Федоровка ауылының "Ҡыңғырау" балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре һәм Шишмә районы Әлкә ауылынан Р. Абзалов исемендәге мәктәп уҡыусылары еңеүсе тип табылды. Улар тамашаны рус телендә ҡуйҙы. Йәнһүрәттәр төшөрөү оҫталығы буйынса номинацияла беренсе урынды Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының 1-се мәктәбе уҡыусыһы Ләйлә Сынбулатова (етәксеһе Н. Йәнтүрина) алды. Ҡыҙыҡай икенсе класта уҡый, ул аппликация, пластилин ҡулланып, урыҫ халыҡ әкиәте "Тирмәкәй" йәнһүрәтен эшләгән.

"Һаумы, һаумы, әкиәт!" төбәк-ара конкурсында Өфө ҡалаһының мәғариф учреждениелары ла һынатманы. Баш ҡала балалары башҡортса әкиәттәр һөйләп ҡатнашты һәм яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәште. Шуларҙың береһе Өфөнөң 282-се балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Зөлхизә Юлдашбаева. Ул "Эш табылды" башҡорт халыҡ әкиәтен һөйләп, беренсе урын яуланы. "Зөлхизә ҡыҙым "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында тәүге тапҡыр ҡатнаша. Тәүҙә районда, һуңынан ҡала кимәлендә лә беренсе урындарҙы яулағайны, әле Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөндә бөтә гәм алдында бүләкләнеп, осоноп ҡайтты. Балаларҙың күңелдәрен үҫтергән ойоштороусыларға ла, 282-се балалар баҡсаһының тәрбиәсеһе Гөлгөнә Ниғмәтоваға ла рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Әйткәндәй, беҙҙең ике ҡыҙыбыҙ ҙа ошо балалар баҡсаһына йөрөй. Дүрт йәшлек Зөлхизә бында эшләп килгән башҡорт төркөмөндә тәрбиәләнә, кесебеҙ Заһиҙә дөйөм төркөмдә. Шуныһы яҡшы: башҡорт төркөмө тәрбиәләнеүселәре балалар баҡсаһының барлыҡ сараларында ла башҡорт милли кейемен кейеп, башҡортса йырлап-бейеп, шиғырҙар һөйләп ҡатнаша. Бынан тыш, балаларҙы башҡорт мөхитенә ылыҡтырыу өсөн "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы кеүек сараларҙа ла әүҙем ҡатнашыуҙарын хуплап ҡына торабыҙ", - тине еңеүсе ҡыҙҙың атаһы Илмир Юлдашбаев. Әйткәндәй, "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсының ҡала этабында Гран-приға лайыҡ булған Өфөнөң 75-се "Аҡбуҙат" Башҡорт балалар баҡсаһынан 5 йәшлек Алтынай Хәлилова был юлы "Мультипликацион һәм анимацион фильм" номинацияһында беренсе урын яуланы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы паркта махсус майҙансыҡта балаларға башҡорт милли кейемендә фотоға төшөү, "Телемде яратам, башҡортса һөйләшәм!" флешмобында ҡатнашыу мөмкинлеген бирҙе, төрлө уйындар һәм викториналар ойошторҙо. Ошонда уҡ ойошма эргәһендәге Республика атаәсәләр комиссияһы ағзалары белем биреү усаҡтарында туған телдә өйрәнеүгә ғаризалар яҙыу тәртибе тураһында ла аңлатыу эше алып барҙы.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Башҡорт йәмәғәтселеге Өфө ҡалаһының 450 йыллығына ниндәй төҙөлөштәр күрергә теләй?

***Илдар ШӘЙӘХМӘТОВ, "Башҡортостан Республикаһының "1-се Башҡорт атлы полкы - "Любизар" Бөтә Рәсәй тарихи клубы" төбәк йәмәғәт ойошмаһының идара рәйесе:*** Өфөнөң юбилейы тинәк тә, ул барыбер Башҡортостандың баш ҡалаһының юбилейы булып күҙ алдына баҫа. Тимәк, унда милли колорит та сағылырға, йәғни ошо унайҙан милли рухиәтебеҙгә ҡағылышлы проекттарҙы ла тормошҡа ашырып ҡалырға кәрәктер, моғайын. Тәү сиратта мин баш ҡалала Урал батыр һәйкәле булырға тейеш тип иҫәпләйем һәм был күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Был теманы бынан бер нисә йыл элек Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы күтәреп сығып, хатта Урал батыр һәйкәленә конкурс иғлан итеп, уның еңеүселәрен дә билдәләгәйне. Әммә проектты тормошҡа ашырыу идеяһы ғына ни сәбәптәндер туҡтап ҡалды һәм ул, ғәҙәттәгесә, һаңдыҡ төбөнә һалынды. Ә бит бары тик бының өсөн урын билдәләп, эш башларға ғына кәрәк ине. Моғайын, Урал батыр һәйкәлен төҙөргә Хөкүмәттең аҡсаһы булмаһа, халыҡтан да йыйырға мөмкин булыр һәм халыҡ ҡаршы килмәҫ.

Миненсә, оло юбилей унайынан тағы бер мәсьәләне хәл итергә кәрәк. 2022 йылда башҡорт атлы полктарының 1812-1814 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыуына 210 йыл тула. Улар ҙа, йәғни тарихта "төньяҡ амурҙары" атамаһы аҫтында ингән ҡаһарман башҡорттар ҙа, күптән һәйкәлгә лайыҡ!

Быltыр 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының командиры генерал-майор Миңлегәли Шайморатовҡа Рәсәй Геройы исеме бирелеүе, әлбиттә, халҡыбыҙ өсөн оло ғорурлыҡ, Совет майҙанында уға һәйкәл ҡуйылыуы ла тарихи шәхесебеҙҙе һәм легендар кавалерия дивизияһының иҫтәлеген мәңгеләштереүгә ҙур аҙым, шул уҡ ваҡытта кавалерия яугирҙарының һуғышҡа киткән Дим биҫтәһе вокзалы территорияһында йәки уның эргәһендә ошо хушлашыу мәлен сағылдырған һәйкәл йәки мемориал булдырылһа ла насар булмаҫ ине. Әлбиттә, был теләк ҙур сығымдар талап итә, әммә тарихты беҙҙең быуын һәйкәлдәргә тергеҙеп, киләсәккә аманат итеп ҡалдырмаһа, бер нисә быуындан һуң был хаҡта иҫләүсе лә табылмауы ихтимал.

***Миңлегәфүр ЗӘЙНЕТДИНОВ, Башҡортостандың халыҡ артисы, донъяның виртуоз ҡумыҙсыһы:*** Минең күңелемдә күптән бер хыял йәшәй: Башҡортостанда Ҡумыҙ мәктәбен асыу. Эйе, был сәнғәт төрөнә музыка, сәнғәт мәктәптәрендә уҡытырға, хатта башланғыс, урта, дөйөм белем биреү мәктәптәрендә лә өйрәтергә мөмкин. Әммә айырым мәктәп булдырыу - ул республиканың данын тағы ла яңы бейеклеккә күтәрер ине тип уйлайым. Ни тиһәң дә, донъяла ни бары 20 виртуоз ҡумыҙсыһы бар һәм шуларҙың икеһе (тәүгеһе - Роберт Заһретдинов) Башҡортостандан булыуы ла күпте һөйләй.

Ғөмүмән, беҙҙең халыҡ тыуғандан уҡ сәнғәттең төрлө жанрҙары уртаһында үҫә. Шул уҡ эпос-ҡобайырҙар, йыр-бәйеттәр, бейеүҙәр, ғөрөф-ғәҙәттәр, хатта милли кәсепселек тә һәр баланың күңеленә һалынған, әммә уларҙы артабан үҫтереү өсөн бөгөн бары тик сәсәндәр мәктәбе генә эшләп килә. Шуға күрә, әгәр Ҡумыҙ мәктәбе өсөн айырым бина булмағанда ла, барлыҡ ошо сәнғәт йүнәлештәре буйынса айырым мәктәп булдырып, уларҙы берләштергән Башҡорт йорто асылһа, ҙур ваҡиға булыр ине. Бер заман был турала һүҙ күтәрә биреп тә ҡуйҙылар, Конгресс-холл төҙөлөшө лә Башҡорт йорто булараҡ ҡулланғайны, әммә хәҙер ул конгресс-үҙәккә әйләнеп китте. Тимәк, Башҡорт йорто һәм уның эсендә Ҡумыҙ мәктәбе асыу мәсьәләһе асыҡ ҡала.

**(Темаһың дауамын 5-се биттә уҡығыҙ).**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ОСТАЗДАРҺЫҘ БУЛМАЙ!



**Башҡорт телендә нәшер ителеүсе баҫмаларҙың береһендә эшләгән коллегам менән һөйләшеп алдым. Эйе, уның зары менән килешәм: элекке, беҙ эш башлаған замандағы һымаҡ, үҙ һөнәренә бирелгәнлек, ошо һөнәрендә юғары камиллыҡҡа өлгәшергә ынтылыу юғарыраҡ инде ул заман журналистарында. Ә беҙ һаман уларҙы үҙебеҙ, теге заманда ҡалғандар менән сағыштырабыҙ.**

Үткер генә ҡәләмле, һәләтле коллегам да хәбәрен шул юҫыҡҡараҡ борҙо. Йәштәрҙең журналислыҡ һөнәренә еңел ҡарауына, яуаплыһыҙлығына, яҙа белмәүенә зарланды, үҙенең бына шундай даланһыҙ хеҙмәткәрҙәр араһында өҙгөләнеүе, хәлде бер нисек тә үҙгәртеп булмауы тураһында һөйләне. Шул уҡ ваҡытта уның үҙенең дә был хәлде төҙәтеү өсөн бер ни ҙә эшләмәүен аңлап ҡалдым. Баш мөхәррир урынбаҫары вазифаһын үҙ теләге менән ҡалдырған, хәлде үҙгәртеүгә көс һалырға теләмәгән. Бына был инде бөгөнгө йәш коллегаларҙың беҙҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырған сифаттарының бер сәбәбе - уларға журналислыҡ серҙәрен тапшырыр остаздар юҡ! Кемдән өйрәнергә тейеш һуң йәш кеше беҙҙең һөнәрҙең бер ниндәй юғары уҡыу йортонда ла алып булмаған нескәлектәренә? Беҙ бит үҙебеҙ ҙә редакцияларға бөтөнләй "сей" килеш килеп, оло быуын журналистары, баш мөхәррирҙәр кеүек көслө остаздар ҡулында шымарҙыҡ та баһа.

Минең, мәҫәлән, һәр остазымдың әйткәне хәтерҙә. Башҡорт дәүләт университетының бишенсе курсында уҡығанда "Башҡортостан ҡыҙы" журналына Рәми ағай Ғарипов ҡулы аҫтына эшкә килдем. Ул мине иң тәүҙә уҡыусыларға нисек итеп яуап хаттары яҙырға өйрәтте. Өйрәнеү өсөн Рәми ағайҙың өлкән авторҙарға, хатта йәш кешенең "Нисек шағир булырға?" йәки "Мөхәббәт бармы ул?" тигән һымағыраҡ һорауҙарына яҙған яуап хаттары өлгөләрен яҡшы әҫәрҙәй күреп уҡып сығыуым хәтерҙә. Артабан Рәми ағай мәҡәләне нисек ҡорорға, йәғни тәүҙә һөйләнәсәк һүҙеңдең еп осо булыр фекерҙе табып, шуны ваҡиғалар, диалогтар аша нисек үҫтереү, ослап ҡуйыу кеүек һабаҡтарын бирҙе.

"Башҡортостан" гәзитендәге баш мөхәрриребеҙ Абдулла Исмәғилевтың тыныш билдәләре ҡуйыуҙан башлап, һәр һүҙең, һөйләмең өсөн яуаплылыҡ ала белергә тиклем өйрәтеүе минең үҙемдең дә эш алымыма әйләнде. Артабанғы баш мөхәррирҙәрем - Мансур Әйүповтың һәр мәҡәләндә елле фекер әйтергә, Тәлғәт Сәғитовтың иһә алтын урталыҡ тоторға өйрәтеүе - былар барыһы ла минең журналислыҡ һөнәренең нигеҙен тәшкил итте. Барыһына ла, яҙырға ғына түгел, журналист булараҡ үҙеңде нисек тоторға, кешеләр менән нисек һөйләшергә, геройҙарыңдың "телен" нисек сисергә, етәкселәр менән ниндәй мөнәсәбәт

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Республика территорияһында ҡаҙылма байлыҡтарҙы табыу эшмәкәрлеге һәм ошо өлкәләге хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү мәсьәләләре буйынса ведомствоара комиссия булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Комиссияның маҡсаты - ҡаҙылма байлыҡтар менән ҡулланыу өлкәһендә дәүләт һәм урындағы үҙидаралыҡ органдарының, федераль башҡарма власть, хоҡуҡ һаҡлау органдарының территориаль бүлексәләренең, ойошмаларҙың һәм йәмәғәтселектең үҙ-ара һөҙөмтәле эшләүен тәьмин итеү. Был инициатива быйыл майҙа Баймаҡ районында үткән күсмә кәңәшмәлә белдерелгәйне.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шашка спортын үҫтереү буйынса саралар тураһында указға ҡул ҡуйҙы һәм уны тормошҡа ашырыу бурысын үҙ Хакимиәтенә йөкмәтте. Аныҡлап әйткәндә, ул республикала шашка хәрәкәтен үҫтереү программаһын эшләргә һәм расларға, "Шашка буйынса донъя кубогы" халыҡ-ара турнирын үткәрергә, "Башҡортостандың үҙәк шашка клубы" базаһында дәүләт спорт мәктәбен булдырырға ҡушты. Шашка буйынса ете тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина белдереүенсә, әлеге ваҡытта был өлкәлә тренерҙар һәм педагогтар әҙерләү буйынса һөйләшеүҙәр алып барыла, программаны БДПУ базаһында индереү күҙаллана.

✓Балаларҙы һауыҡтырыу лагерҙарына ебәргәндә медицина тикшереүе үткәрергә кәрәк. Был хаҡта республика һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Ирина Кононова хәбәр итте. "Һауыҡтырыу лагерына барған бала медицина тикшереүен алдан үтергә һәм 086У, 079У формаһы белешмәһен алырға тейеш. Ошонда уҡ булған ауырыуҙары, яһалған прививкалар, анализдар һөҙөмтәһе һәм инфекция йоҡторған ауырыуҙар менән бәйләнеш булмауы хаҡында мәғлүмәт мотлаҡ теркәлә", - тип аңлатты ул.

✓РФ Хөкүмәте бойороғона ярашлы, 2021 йылдың 1 июленән Башҡортостанда коммуналь хеҙмәт өсөн түләнгән хаҡтың үҫеше уртаса 3,8 процент кимәлендә билдәләнгән. Быйыл 1 июлдән электр энергияһы өсөн түләү 5 процентҡа, газ өсөн 3 процентҡа, башҡа төр коммуналь хеҙмәттәр өсөн уртаса 3 процентҡа арта. Һандарҙа иҫәпләгәндә, газдың кубометрына уртаса хаҡ - 7,64 һум, электр энергияһына - 3,5 һум, һыу менән тәьмин итеү өсөн - 27,5 һум, йыллыҡ өсөн 2148,26 һум торасаҡ.

*✓ Улар фекеренсә, кешенең интеллект йәһәтенән, шулай уҡ рухи, ижади һәм физик йә иһә һөнәри йүнәлешен үҫтереүсе, белем һәм тәрбиә биреүсе, рухи ҡиммәттәр йүнәлешен билдәләүсе мәғрифәтселектә сикләү булып тора был закон.*

БЫНАҒАЙЫШ!

**Мәғариф һәм мәғрифәтселек. Был ике игеҙәк төшөнсәне айырып ҡарау һис мөмкин түгел. Мәғариф - дәүләт программаһына ярашлы шарттарҙа белем биреү учреждениеларында уҡытыу, стандарт белем биреүҙе аңлатһа, мәғрифәтселек - ул шулай уҡ белем биреү, ләкин ул ниндәйҙер диктат, ҡалыптарҙан азат булған ижади процесс, йәғни нигеҙ белемгә өҫтәп, яңыны өйрәнеү, берәй өлкәлә белемеңде, донъяға ҡарашыңды киңәйтеү, рухи кимәлеңде, зауҡыңды байытыу.**

# МӘҒРИФӘТ - ҠАНАТЛЫ АТ,

## уны нисек сикләмәк кәрәк?

Шәхесте төрлө яҡлап үҫтереүҙең ошо уҡ маҡсаттарын мәғариф өлкәһе лә тәьмин итергә тейеш, ләкин ул ҡәтғи программа менән сикләнгән һәм үҙенең методик һәм контроль ысулдары булған система. Ә мәғрифәтселек ул, һәр хәлдә, минең күҙ алдына ҡанатлы толпар йә булмаһа атаҡлы мәғрифәтселәребеҙ йөҙөндә Аҡмулла образында күҙ алдына килеп баҫа. Мәғрифәтселек, әйтеүемсә, ижади эшмәкәрлек, шул уҡ белем, тәрбиә биреү, ләкин ул әлеге система ҡалыптарынан азат. Шулай ҙа был мәғариф өлкәһендә лә ижад ҡомары менән эшләүҙе инҡар итмәй, киреһенсә, бөгөн беҙҙең ижади һәләткә эйә бик күп уҡытыусыларыбыҙ бар. Бына шунан айырып ҡара инде уларҙы!

Ошоға тиклем башҡа ла килмәгән был закон проектын, йәғни Рәсәйҙең мәғариф тураһындағы законына индерелгән "Мәғрифәтселек эшмәкәрлеге тураһында" төҙәтеүҙәрҙе, эш юҡта эш булһын, тигәндәй, Дәүләт Думаһының "Берҙәм Рәсәй" партияһы ҡабул итте.



Улар фекеренсә, мәктәп уҡыусыларын, студенттарҙы илдең дәүләт сәйәсәтенә һәм Конституция төҙөлөшөнә ҡаршы ихтимал булған пропаганда сараларынан ҡурсыу өсөн мәғрифәтселек эшмәкәрлеген "ҡулға алыу", йәғни хоҡуҡи көйләү кәрәк. Быны бөгөнгө ябай булмаған шарттарҙа көнө-төнө виртуаль донъяла йәшәгән йәштәр тәртибенән сығып аңларға ла була. Ләкин бит, уйлап ҡараһаң, ниндәй ҙә булһа эшмәкәрлек төрҙәрен РФ Конституцияһына ҡаршы килгән ғәмәлдәр маҡсаттарында файҙаланыу былай ҙа ил законы һәм Конституция тарафынан тыйылған. Бында мәғрифәтселек эшмәкәрлегенең ни ҡыҫылышы бар, тип яңы закон менән ризаһыҙлығын белдерә интеллектуаль йәмғәтселек. Яңы закон, шулай итеп, һөнәре халыҡ алдында сығыш яһау һәм мәғрифәтселек эшмәкәрлеге менән бәйле булған ғалимдарҙы, мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәрен, журналистарҙы, юристарҙы, төрлө өлкәләр буйынса билдәле лекторҙарҙы, шәхси белем баҙары вәкилдәрен хәүефләндерҙе, борсоуға һалды. Эш бында хатта шундай көлкөлө миҫалдарға тиклем барып етте: шәхси мәктәптәр менән бергә был закон хәҙер дизайн буйынса онлайн курстар, сәләмәт йәшәү рәүеше, кулинария һәм хатта бәйләм бәйләү кеүек йорт хужабикәләренең эшмәкәрлегенә лә контроль булдырасаҡмы ни инде?..

Яңы закон хаҡында билдәле астрофизик, фәнде популярлаштырыусы ғалим Сергей Попов бына нимә ти: "Мәғрифәтселек иҫәбенә хәҙер бөтөн булған сайттар, youtube-каналдар, подкастар ҙа инәсәк. Фәнде популярлаштырыу - шул уҡ белем биреү һәм ул ижади ынтылышҡа нигеҙләнгән. Уны әлегесә сикләү саралары менән беҙҙең проекттарҙы юҡҡа сығарыу хәүефе янай: кемдер тышҡы йоғонто аҫтында эшләргә теләмәйәсәк, ә кемдеңдер яратҡан эшен дауам итеү өсөн лицензия юллау мәшәҡәттәренә көсөн сарыф иткеһе килмәйәсәк". Новосибирскиҙан крайҙы өйрәнеүсе Андрей Поздняков былай ти: "Тыуған яҡ тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар күп, мин уларға лекциялар уҡыйым, ҡалабыҙҙың иҫтәлекле тарихи урындары буйлап экскурсиялар үткәрәм. Был да хәҙер контроль аҫтында ҡалыусы мәғрифәтселек эшмәкәрлеге иҫәпләнәме инде? Дөрөҫөн әйткәндә, был энтузиастарҙың барлыюҡлы бизнес тәгәрмәсенә таяҡ тығыу ул".

Күпселек фекер алышыусылар уйынса, былай булһа, мәҙәни һәм ял үҙәктәре, дискуссия клубтары һәм майҙансыҡтары, ҡыҙыҡһыныуҙар буйынса секциялар, түңәрәктәр үҙ эшмәкәрлеген сикләйәсәк йә бөтөнләйгә ябыласаҡ. Ҡыҫҡаһы, мәғариф (белем биреү) программаһынан тыш йәшәп һәм эшләп килгән бөтөн мәғлүмәт ресурстары: блогерҙар, сайттар, видеоматериалдар, постар яҙыу, интервью - бөтәһе лә контролгә алынасаҡ. Был йәһәттән аңлашылмаған нәмә лә бар: киң мәғлүмәт саралары шулай уҡ ошо закон йоғонтоһонда эшләйәсәкме? Улар ҙа бит белем һәм аң тарата, рухи ҡиммәттәребеҙҙе пропагандалай, тәжрибә уртаҡлаша, дөрөҫ, сәләмәт йәшәү рәүешенә йүнәлеш бирә һ.б. Улай тиһәң, был өлкәлә уның эшен көйләүсе һәм контроллаусе Матбуғат тураһындағы закон, цензура бар. Шуның кеүек, хәҙер мәғрифәтселек эшмәкәрлеге элеккесә үҙ ихтыярында түгел, ә дәүләт тарафынан ҡуйылған шарттарҙы үтәү тәртибендә һәм рәүешендә, даими контроль аҫтында алып барылырға тейеш.

Ошо йылдың 16 мартында Дәүләт Думаһы ҡабул иткән был закон өсөн фәҡәт "Берҙәм Рәсәй"ҙәр тауыш бирһә, коммунистар, ЛДПР һәм "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" партиялары тулыһынса ҡаршы сығыш яһаны. Бынан тыш, мәғрифәтселек эшмәкәрлеге тураһында төҙәтеүҙәргә ҡаршы петицияға 238 мең кеше ҡул ҡуйған. Улар фекеренсә, кешенең интеллект йәһәтенән, шулай уҡ рухи, ижади һәм физик йә иһә һөнәри йүнәлешен үҫтереүсе, белем һәм тәрбиә биреүсе, рухи ҡиммәттәр йүнәлешен билдәләүсе мәғрифәтселектә сикләү булып тора был закон. Илдең фәнни берләшмәләре, шул иҫәптән Фәндәр академияһы ла ижади эшмәкәрлектә сикләү һәм бюрократия тыуҙырыусы был төҙәтеүҙәргә ҡаршы сыҡты. "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" партияһы етәксеһе Сергей Миронов Хөкүмәтте мәғрифәтселек эшмәкәрлеген көйләүҙе йомшартырға саҡырып өүҙем сығыш яһай. Сөнки, ти ул, мәғрифәтселек эшмәкәрлеге менән фәҡәт балиғ йәштәгеләр һәм ошо өлкәлә ике йыл стажы булғандар ғына шөғөлләнә ала. Ә инде ғалим, яҙыусы, артист йә башҡа билдәле шәхестәр осрашыуға, лекция уҡырға саҡырыла икән, ул иң тәүҙә бик күп белешмә һәм башҡа рөхсәт ҡағыҙҙары юллап йөрөргә, өҫтәүенә, медицина тикшереүе лә үтергә тейеш була. Бындай ҡәтғи тәртиптәр менән ризалашыусы мәғрифәтсе-энтузиастар, ай-һай, күп табылырмы икән? Сергей Миронов дөрөҫ әйтә: "Мәғрифәтселек эшмәкәрлеге - ул белем биреү генә түгел, йәш быуынды тәрбиәләү сараһы ла. Әгәр беҙгә белемле, мәҙәни, илһөйәр йәштәр кәрәк икән, шуныһы йәл: министрҙар кабинетының ҡәтғи ҡағиҙә һәм шарттары был маҡсатҡа тотҡарлыҡ ҡына яһаясаҡ..."

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

ҡоророға, ғөмүмән, журналист этикаһына ла ана шул Ғәтиәт Үзбәков, Аҡмал Саптаров, Әниф Бикҡолов, Ризуан Хажиев, Файыҡ Мөхәмәтйәнов, Ислам Мырҙабаев, Заһир Исмәғилев, Юныс Әхмәҙиев, Дәүләт Мәһәҙиев, Абдрахман Баязитов, Абдрахман Йосопов, Сабир Шәрипов, Риф Тойғонов, Хәсән Назаров, Рәүеф Насиров, Аҫылғужа Баһуманов, Ғәли Амантаев, Азат Байсурин, Фатих Абдуллин, Хәмит Шәрипов, Ильяс Иҫәнбаев, Айсыуаҡ Шәйхисламов кеүек оло ҡәләмдәш-остаздар йәлеп итте бит беҙҙе, йәш хәбәрселәрҙе. Бына шундай оҫталыҡ мәктәбе аша үткәнбеҙ беҙ һәм шуның менән бәхетлебеҙ ҙә, тип уйланыла. Ысынында, бөгөнгө йәш журналистарға бындай мәктәп тураһында хыялланырға ғына ҡала....

Эйе, бөгөн йәштәребеҙ һәр өлкәлә - халҡыбыҙ тарихындағы, шәжәрәләрҙәге, ғаиләлә олатай-өләсәй һәм ейән-ейәнсәр араһындағы быуындар бәйләнешен өр-яңынан тергеҙеү менән мәшғүл. Шулай уҡ ата-бабалар шөғөлләнгән, йән аҫраған шөғөл-кәсептәр ҙә онотола яҙған - был тәңгәлдә лә остаз булырҙай милләттәштәргә эш етерлек булыр ине. Мәҫәлән, бөгөн күптәр унар, йөҙәр башлап йылҡы аҫрай. Ошо мал йәнлелек - ул ҡан саҡырыуы аша яңынан тергеҙелгән шөғөл бит. Әммә ир-егеттәребеҙ атҡа бәйле кәсептәрҙе белмәй тиерлек. Ат еккеһе өсөн тәғәйенләнгән йүгән-ыңғырсаҡ, дуға-ҡамыт, эйәр-өпсөн эшләргә тотоноу ҡайҙа ти ул. Шул аттар менге, сабыш өсөн генә өйрәтелһә лә - ҡана ла һуң! Бында ла быуындар бәйләнешен өҙөүсе шул уҡ остаздар булмауы бәкәлгә һуға...

...14 июндә билдәләнәсәк Матбуғат байрамыбыҙ уңайынан ҡотлауҙарымды ҡәләмдәштәргә йүнәлтеп, ошо изге һанаған һөнәребеҙ артабан да йәшәһен, артабан да кешеләргә кәрәкле булһын тигән теләктә булайыҡ, оло быуын журналистары үҙ иңенән остазлыҡты һалмай, тәжрибә уртаҡлашһын, йәштәр иһә белемен дә, һәләтен дә камиллаштырыуға ынтылһын, тип кенә әйтмәксе инем. Байрам менән!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓РФ Дәүләт Думаһы депутаттары РФ Енәйәт кодексына "быға тиклем административ язаға йәки хөкөмгә тарттырылған кешене иҫерек килеш транспорт сараһын йөрөткән өсөн" 3 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеүҙе күҙаллаған үҙгәртеүҙәр ҡабул итте. Шулай уҡ ҡабаттан иҫерек килеш руль артына ултырыусыларға штраф күләме лә арта һәм мәжбүри эш рәүешендә яза бирелергә мөмкин. Әлегә иҫерек килеш машина йөрөтөүселәргә иң ҡаты яза - 2 йыл иркенән мәхрүм итеү.

✓2020 йылда республикала 41 180 бала тыуған, был 2019 йылға ҡарағанда 851-гә кәм. Уларҙың араһында ғаиләләге икенсе һәм артабанғы балалар күпселекте тәшкил иткән. 2005 йылда улар 13 процент булһа, 2020 йылда 28 процентҡа еткән. Был хаҡта БР ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры урынбаҫары Анна Таболина хәбәр итте һәм Башҡортостан күп балалы ғаиләләр һаны буйынса Дағстан, Чечня, Мәскәүҙән ҡала дүртенсе урынды биләй, тип белдерҙе. Республикала 5 һәм унан күберәк балалы 46 мең әсәй йәшәүе билдәле.

✓Башҡортостанда 21 июндән хаҡлы ялдағылар һәм инвалидтарҙың туристик путевкалары хаҡын өлөшләтә субсидиялау башлана. "Сертификаттар Халыҡҡа социаль ярҙам итеү республика үҙәге бүлексәләрендә, пенсионерҙар һәм инвалидтар теркәлгән урын буйынса "Ғаилә" район-ара үҙәктәрендә биреләсәк", - тип хәбәр иттеләр БР Туризм буйынса дәүләт комитетында. Быйыл Башҡортостандың 905-кә яҡын кешеһен 7,8 миллион һумлыҡ туристик путевка менән тәьмин итеү ҡаралған, әлегә республика маршруттары буйлап 180 путевка һайлап алынған.

✓Башҡортостанда ағымдағы төҙөлөш миҙгелендә Шүлгәнташ мәмерйәһенә асфальт-бетон юлды төҙөп бөтәсәктәр. 5,2 км аралыҡтағы Иҫке Собханғол - Мораҡ юлы төбәк һәм муниципаль-ара программаһына ингән. Шулай уҡ Иглин - Кәлтә юлының күптән көтөлгән 7,5 километрында реконструкция тамамланырға тейеш. Бөрө - Тастүбә - Һатҡы юлын төҙөкләндереү дауам итә. 10 километрлыҡ Белорет - Учалы - Миәс юлы; 13,6 км Благовещен - Павловка юлы; 11,6 км Өфө - Бөрө - Яңауыл; 10,9 км Дүртөйлө - Нефтекама; 14,4 км Сәрмән - Амангилде - Баймаҡ; 6 км Аҫҡар - Әлмөхәмәт - Сибай; 6 км Иглин - Красный Восход юлдары төҙөлә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ӨФӨ БУЙЛАП...



**8 июндә Республика Башлығы Радий Хәбиров Өфө ҡалаһының парктары һәм йәмәғәт урындары торошо менән танышты, уларҙың төҙөклөгөн тикшерҙе. Киров районында ул төҙөлөп бөтөп килгән "Көньяҡ" паркында булды.**

Паркта ял майҙансыҡтарынан тыш, спорт, уйын майҙансыҡтары, воркаут тренажерҙары, шулай уҡ йүгереү һәм йәйәүлеләр өсөн юлдар, фонтан буласаҡ. Софья Перовская урамындағы күп фатирлы йорттарҙың ихаталарын комплекслы төҙөкләндереү ҙә өҫтөнлөклө мәсьәләләр рәтендә. Бында эштәр сентябргә тамамланыр тип көтөлә. Октябрь районында урынлашҡан "Кашҡаҙан" паркында ҙур төҙөкләндереү эштәре тамамланыу алдында. Ул Һупайлы биҫтәһенең генә түгел, республиканың иң яҡшы йәмәғәт территорияһы буласаҡ. Ошо көндәрҙә генә Ҡашҡаҙан күленә аҡҡоштар төшкән. Был районда шулай уҡ 130-сы мәктәп эргәһендәге "Коштар" скверын төҙөкләндереү ҙә тамамлана, уны проектлағанда халыҡ фекере иҫәпкә алына. Калинин районында республика етәксеһе "Беренсе Май" паркын реконструкциялау барышы менән танышты. Бында оҙонлоғо 1,5 километр булған "Сәләмәтлек һуҡмағы", велосипедсылар өсөн юл, скейт-парк, велопарковкалар һәм эсәр һыу фонтандары буласаҡ. Барлыҡ эштәр июль урталарына тамамланырға тейеш.

## ТАҘАЛЫҠ КӨНДӘРЕ



**3-5 июнь баш ҡалала Таҙалыҡ көндәре тип иғлан ителде һәм ул Ҡала көнөн ҡаршылауға арналды.**

Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәрҙән тыш, ҡала территорияһын таҙартыуға сәнәғәт предприятиелары, сауҙа, мәғариф, мәҙәниәт, йәштәр сәйәсәте, спорт, һаулыҡ һаҡлау, төҙөлөш, көнкүреш хеҙмәтләндереүе ойошмалары, шулай уҡ район хакимиәттәре хеҙмәткәрҙәре ҡушылды. Был көндө урамдар һеперелде, сүп-сар йыйылды һәм сығарылды, үлән сабылды, ҡыуаҡтар тигеҙләп ҡиҫелде, туҡталҡа павильондары йыуылды, юл ҡатламы, күперҙәр, йәйәүлеләр үткәүелдәре, парктар, скверҙар, социаль учреждениелар юлдары таҙартылды, рөхсәт ителмәгән сүплектәр бөтөрөлдө. Торлаҡ хужалығы хеҙмәткәрҙәре ихаталарҙы төҙөкләндереү менән шөғөлләнде. Совет районында "Дудкино" һыу аша сығыу урынында экологик сара ойошторолдо, хакимиәт хеҙмәткәрҙәре Менделеев, Баҡалы, Обь урамдарында эшләне. Орджоникидзе районы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре Чудинов урамы эргәһендәге урмандан 8 кубометр сүп-сар йыйҙы, шулай уҡ Непейцевск дендропаркын сүп-сарҙан таҙартты. Дим районы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре тимер юлсылар менән берлектә Баланово урман-парк зонаһы территорияһында эшләне. Октябрь районында Ҡариҙел йылғаһының яр буйы, Новогорная, Рехмуков, Р. Зорге, Р. Нуриев урамдары, Салауат Юлаев проспекты буйы таҙартылды. Был көндә ҡаланан дөйөм алғанда 1 409 кубометр сүп-сар сығарылды.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ИҢ АЛДЫНҒЫЛАР ИҪӘБЕНДӘ




**Республика Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге делегация 2-5 июндә Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында ҡатнашты. Сара барышында Башҡортостан дөйөм күләме 122 миллиард һум булған 25 килешеү төҙөнө, улар 2000 эш урыны булдырыу мөмкинлеге бирәсәк.**

Төбәк экспозицияһы 231 квадрат метр майҙанда урынлаша һәм ете, шул иҫәптән авиация, туризм, башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәре йүнәлештәрен сағылдыра. Яны ойошторолған Башҡортостан Республикаһы менән идара итеү үҙәгенең (ЦУР) экспозицияһы күргәҙмә стендында иң төп һәм ҙурлыҡлы буйынса өсөнсө урынды алып тора, ул социаль коммуникациялар, мәғлүмәт, иҡтисади аналитика блоктарын тәҡдим итә. Тап ошо иҡтисади аналитика блогы Башҡортостан ЦУР-ын башҡа төбәктәрҙән айырып тора ла инде. Төрлө йүнәлештәр буйынса барлыҡ мәғлүмәттәр мәғлүмәт панелдәренә килә һәм был уларҙы системаға һалырға, бюджет процестары менән грамоталы һәм һөҙөмтәле идара итергә мөмкинлек бирә.

Килешеүҙәргә килгәндә, улар рәтендә Мәскәү дәүләт халыҡ-ара мөнәсәбәттәр университеты ректоры Анатолий Торкунов менән хеҙмәттәшлек тураһында төҙөлгән килешеү ҙә бар. Уға ярашлы абруйлы уҡыу йорто киләсәктә Башҡортостандың иҡтисади, сәнәғәте, ауыл хужалығы һәм социаль тармағы өсөн квалификациялы белгестәрҙе маҡсатлы рәүештә әҙерләйәсәк.

"Таврос" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт менән республика Хөкүмәтенең килешеү төҙөүе лә ҙур өмөттәр уята, сөнки был аҙым малсылыҡ, йәғни ит эшкәртеүгә ҡағыла. Проект сәғәтенә 240 баш мал һуйыу һәм етештереүсәнлеге тәүлегенә 200 тонна һыуытылған ит, 100 тонна колбаса эшләп сығарыуҙы күҙаллай. Төҙөлөш августа башланырға тейеш.

Оҙонлоғо 200 километр булған Ҡаҙан - Екатеринбург автомобиль юлын Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондары аша үткәреү вариантын Рәсәйҙең Транспорт министрлығы хуплап сыға. РФ Президенты В. Путин үҙенең Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә тәҡдим итеүенсә, был төҙөлөш өс йылда тамамланырға тейеш. Проект менән "Автодор" идара итә һәм юлдар селтәрен планлаштырғанда уның эсенә күп иҡтисади үҫеш үҙәктәренең инеүенә өҫтөнлөк бирә. "Башҡортостан Республикаһы шундай төп үҙәктәрҙең береһе булып тора һәм был беҙгә трасса маршрутын һайлауҙа бик мөһим", - тине ойошма етәксеһе Вячеслав Петушенко килешеү төҙөү ваҡытында.

Башҡортостандың башҡаларға таратырлыҡ өлгөләре лә етерлек. Форумда сығыш яһап, Радий Хәбиров скандинавса атлауҙың халыҡ спорт төрөнә әүерелеүен, быйыл Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылы булғанлыҡтан, спорт менән шөғөлләнеүсе кешеләрҙең һанын 2 миллионға тиклем арттырыу күҙалланыуын билдәләне. Бөгөн республикала барлығы 89 төбәк спорт федерацияһы эшләй. Башҡортостан спорт ҡоролмалары һаны буйынса (13 мең самаһы) Мәскәүҙән ҡала илдә икенсе урында тора. Әле Өфөлә ябыҡ футбол манежы, спорт гимнастикаһы буйынса физкультура комплексы төҙөлә башлаған. Халыҡ-ара Көрәш һарайын, Волейбол үҙәген, Ишеү саломы үҙәген проектлау тамамланған. Райондарҙа спорт резервын тулыландырыу учреждениелары асыла. "Ауыл тренеры" республика проекты эшләй, ауыл тренерҙарына 600 мең һумлыҡ гранттар бирелә. Ауыл ерендә 25 метрлыҡ бассейндар төҙөлә һәм улар киләсәктә барлыҡ район үҙәктәрендә лә буласаҡ. Әйткәндәй, "Ауыл тренеры" проекты нигеҙендә федераль кимәлдә программа әҙерләнә. Республика "Мәктәптәргә - спорт көрәше" федераль программаһының пилот майҙансығы ла булып тора, шулай уҡ башланғыс синыф уҡыусылары өсөн "Сәләмәт быуын - көслө төбәк" проекты ла индерелә.

4 июндә Халыҡ-ара Петербург иҡтисад форумында Рәсәй Федерацияһы субъекттарының инвестицион климаты торошонаң Милли рейтингы һөҙөмтәләре билдәле булды. Был абруйлы рейтингта Башҡортостан беренсе тапҡыр 5-се урынға күтәрелде. Башҡортостан 2015 йылдан абруйлы рейтингта ҡатнашып килһә лә, ул тәүге йылда - 40-сы, 2016 йылда - 20-се, 2017 йылда - 13-сө, 2018 йылда - 23-сө, 2019 йылда - 16-сы, былтыр 9-сы урында була. Рәсәй Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Андрей Белоусов Башҡортостандың һөҙөмтәһен сенсация тип, шулай уҡ республикала бизнес-шерифтар институтын булдырыуҙы ла ыңғай баһаланы, был алымды ил буйынса таратыу мәсьәләһен күтәрҙе. Башҡортостандың Стратегик инициативалар агентлығы үткәргән ТОП-5 рейтингына инеүен Рәсәй Президенты Владимир Путин да билдәләп китте һәм төбәктәргә эшлекле мөхит булдырыуҙа системалы ярҙам күрһәтеләсәген белдерҙе.

Форум тәьҫораттары менән бүлешеп, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бындай сараларҙа яңы танышлыҡтар, бәйләнештәр булдырылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм: "Беҙ инвестициялар өсөн асыҡ төбәк, көслө, ижади, ҡыҙыҡлы команда булыуыбыҙҙы, һәр инвестор менән намыслы һәм ғәҙел эш алып барырға әҙерлегебеҙҙе күрһәтә алдыҡ. Рәсәй Президентының республиканы билдәләп китеүе лә бик мөһим. Беҙ яҡшы башланғысҡа нигеҙ һалдыҡ. Киләсәккә ышанyслы бағабыҙ, ошо көндәрҙә эшләнгән эштәр алдағы көндәрҙә завод-фабрикалар, яңы эш урындары булып тормошҡа ашасаҡ", - тип белдерҙе.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА**
**әҙерләне.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡалала Зинино һәм Нуғай ауылдары йүнәлеше иң проблемалыларҙың береһе булып тора, сөнки тимер юлын аша сығыу урыны көйләнмәгән һәм был даими рәүештә ҡатмарлыҡтар тыуҙыра. Ә был урындан көнөнә 25 меңдән ашыу автомобиль үтә. Иртән бында тығындарҙа 50-60 минутҡа тиклем тотҡарланырға мөмкин, шулай уҡ авариялар ҙа йыш булып тора. Тиҙҙән бында "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә яңы юл сиселеше төҙөлә башлаясаҡ. Әле төҙөлөш-монтаж эштәрен алып барыу өсөн подрядсы һайлау процедураһы башҡарыла. Масштаблы проект 2023 йылдың июлендә файҙаланыуға тапшырыласаҡ тип күҙаллана.

✓12 июндә "Өфө-Арена"ла Салауат Юлаевтың тыуыуына 267 йыл тулыу айҡанлы "Горилла ММА Серия - 34: Башҡортостан йөрәге һәм йоҙроғо" турниры уҙа. Унда 20 тәжрибәле көрәшсе сығыш яһай. Башҡортостан данын Ғайса Ҡотошов һәм Юнир Бикбаев яҡлай.

✓Һарытауҙа уҙғарылған Собинов фестивале сиктәрендә 22-се тапҡыр ойошторолған Вокалсылар конкурстары конкурсында Өфө басы, Башҡорт опера һәм балет театры солисы, Башҡортостандың халыҡ артисы Артур Ҡәйепҡолов махсус диплом һәм премия менән наградланды. Конкурста төрлө илдәрҙән барлығы 75 йырсы ҡатнашты, 12 кеше юғары баһаға лайыҡ булды.

✓Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Матбуғат йорто алдындағы майҙанында Матбуғат байрамы үтте. 17 июнгә тиклем барлыҡ гәзит-журналдарға ташламалы яҙылыу хаҡтары иғлан ителгәйне, байрамға килгән халыҡтың күбеһе ошо мөмкинлектән файҙаланды, бүләктәр алып ҡыуанды. Шулай уҡ һәр редакция был майҙанға республиканың танылған йырсыларын, ҡурайсыларын саҡырғайны. "Киске Өфө" гәзите исеменән майҙандағыларҙы Өфө сәнғәт институты студенты Гөлфиә Һөйәрғолова думбырала уйнап сәләмләне.

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле тарихында тәүге тапҡыр артистар Ҡырым Республикаһы буйлап ҙур сәфәргә сыҡты һәм бер аҙнала биш концерт күрһәтте. Ғәскәровсылар Ялтала, Симферополдә, Евпаторияла, Белогорск районы Ароматное ҡасабаһында һәм Белогорскиҙа сығыш яһаны. Был - ансамблдең быйылғы миҙгелдә һуңғы гастролдәре. 9 июндә коллективтың Концерт залында 82-се миҙгелде йомғаҡлау концерты булды.

**"БАШИНФОРМ"**
**материалдары файҙаланылды.**

✓ *"Ҡашҡаҙан" паркы - ҡала халҡының яратҡан ял итеү урыны. Бында күл тәртипкә килтерелә, яңы эскәмйәләр ултыртыла, аттракциондар урынлаштырыла. Яҡын арала был йәмәғәт территорияһы тағы ла матурыраҡ буласаҡ.*



*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

**Мәскәүҙә 2024 йылда билдәләнәсәк Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығына башҡарыласаҡ эштәр планы раҫланды. Республика Башлығы Радий Хәбиров әйтеүенсә, алда торған юбилей - ҡунаҡтар өсөн түгел, ул тәү сиратта ҡала халҡы өсөн. Шуға күрә барлыҡ ихаталарҙа, урамдарҙа, парктарҙа һәм скверҙарҙа тәртип булдырыласаҡ. Шулай уҡ төп төҙөлөш объекттары ла буласаҡ. Түбәндә бирелгән исемлек - асыҡ, йәғни уға яңы проекттар ҙа өҫтәләсәк, ә финанслау урындағы һәм федераль бюджеттан бүленәсәк. Мәғлүм булыуынса, юбилей сараларын федераль кимәлдә үткәреү инициативаһын Владимир Путин шәхсән хуплап сыҡты һәм РФ Хөкүмәтенә ойоштороу комитеты төҙөргә, уның рәйесе вазифаһын вице-премьер Алексей Оверчукка йөкмәтте.**

# НИМӘЛӘР ТӨҘӨЛӘСӘК?



**1.** Рус драма театрында сымдар, кондиционерҙар системаһы, ултырғыстар, акустика, ут, сәхнә ҡорамалдары алмаштырыласаҡ, ҙур зал тулыһынса ремонтланасаҡ, бинаның тирә-яғы төҙөкләндереләсәк. Проекттың хаҡы - 1,5 миллиард һум.

**2.** Ҡурсаҡ театры 1976 йылда төҙөлгәндән алып ремонт күрмәгән. Капиталь ремонттан һуң бында яңы зал ғына түгел, кафе, балалар тұнәрәктәре, музей буласаҡ. Проекттың хаҡы - 780 миллион һум.

**3.** Өфө дәүләт циркы бинаһы һуңғы тапҡыр 1994 йылда төҙөкләндерелгән һәм 2017 йылда ремонтҡа ябылған. Бында тулыһынса вентиляцияны, йылытыу системаһын, электр сымдарын, ҡыйығын алмаштырасаҡтар, тамаша залын, хайуандар торған бинаны тулыһынса ремонтлаясаҡтар. Проекттың хаҡы - 1,5 миллиард һум.

**4.** Октябрь революцияһы урамы - үҙенең тарихи йөҙөн һаҡлап ҡалған иң боронғо урамдарҙың береһе. Урамда XVIII-XIX быуаттың семәрләп эшләнгән тәҙрә баштары һәм мансардалы 45-тән ашыу йорт һаҡланған. Боронғо Өфө рухы бында һаман да йәшәй. Йорттарҙы тулыһынса реставрациялау, урамдың бер өлөшөн йәйәүлеләр урамы итеп үҙгәртеү планлаштырыла. Проект хаҡы - 2,13 миллиард һум.

**5.** Ағиҙелдең яр буйы ҡаланың төп йәйәү йөрөү урыны булып тора. Уны өс ҡатлы итеп эшләү рекреацион, йәйәү йөрөү һәм спорт ҡеүәтен тулыһынса үҫтереү мөмкинлеге бирә. Проекттың хаҡы - 1,2 миллиард һум.

**6.** "Ҡашҡаҙан" паркы - ҡала халҡының яратҡан ял итеү урыны. Бында күл тәртипкә килтерелә, яңы эскәмйәләр ултыртыла, аттракциондар урынлаштырыла. Яҡын арала ҡаланың был йәмәғәт территорияһы тағы ла матурыраҡ буласаҡ. Проекттың хаҡы - 650 миллион һум.

**7.** Теплое күле һәм Баландин бульвары. Инорс биҫтәһенең айырым йәмәғәт киңлеге барлыҡҡа киләсәк. Бында яңы парк булдырып, Теплое күленең яр буйын төҙөкләндереп, заманға яраҡлаштырасаҡтар. Проекттың хаҡы - 700 миллион һум.

**8.** Депозитарий һәм археология музейы V-XVI быуаттарҙың археология һәйкәле булған "Өфө-II" ҡаласығы майҙаны территорияһында, ҡаланың тап үҙәгендә асыласаҡ. Асыҡ һауалағы музей башҡорт еренең уникаль мираҫын киң йәмәғәтселеккә еткереү мөмкинлеге бирәсәк. Музей Тәркиәләге кеүек буласаҡ. Проект хаҡы - 1,26 миллиард һум.

**9.** Волейбол үҙәге. Калинин исемендәге парк эргәһендә халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй кимәлендәге ярыштар уҙғарыу өсөн спорт комплексы төҙөләсәк. Бында 5 мең тамашасы һыйҙырышлы универсаль спорт залы, спорт-терегеҙеү медицина үҙәге менән балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәп-интернаты буласаҡ. Проект хаҡы - 4,3 миллиард һум.

**10.** Спорт көрәше буйынса халыҡ-ара үҙәк "Глумилино" биҫтәһендә урынлашасаҡ. Комплексҡа 3400 тамашасы һыйҙырышлы спорт-концерт залы, 19 көрәш келәме, балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе, ҡунаҡхана, конференц-зал, медицина-терегеҙеү үҙәге һәм башҡа ярҙамсы биналар инәсәк. Проекттың хаҡы - 3,58 миллиард һум.

**11.** Интернационал районында Ағиҙел йылғаһы аша күпер Салауат Юлаев проспекты менән Черниковканы һәм Өфө Затонын, 8 Март, Алексеевка ҡасабаларын тоташтырасаҡ. Күперҙең оҙонлоғо 1322 метр, проекттың хаҡы - 10,5 миллиард һум.

**12.** Салауат Юлаев проспектының икенсе сираты Ватутин урамы (адмирал Макаров урамы аша) аша Октябрь проспекты һәм Интернационал урамы киҫелештәренә тиклем дауам итәсәк. Проекттың хаҡы - 9 миллиард һум.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## КӨЙЛӘҮСЕ ҠАНУН

**Парламенттың сираттағы пленар ултырышында республикала туризм эшмәкәрлеген көйләүсе ҡанунға үҙгәрештәр индереү тураһындағы закон проекты ҡаралыуы кәҙаллана.**

Атап әйткәндә, республика ҡанунилтендә туристик маршруттың хоҡуҡи статусын, шулай уҡ уның маҡсаттарын һәм ҡулланыу принциптарын нығытыу тәҡдим ителә. Закон проектын әҙерләгәндә туризм индустрияһы үҫешкәнлеге уңышлы тип һаналған башҡа төбәктәрҙең, мәҫәлән, Алтай, Ҡырым, Яҡутстан, Краснодар крайы һәм башҡаларҙың уңышлы тәжрибәһе иҫәпкә алына. "Республикала туристарҙың яратҡан урындары бик күп. Популяр маршруттар ҙа, бик билдәле булмағандары ла бар, әммә улар һаҡланыу тәьмин иткән һәм туристик инфраструктураны үҫтереүгә ярҙам иткән махсус социаль статусҡа эйә түгел. Беҙ бындай маршруттарҙы "законлаштырырға" һәм уларҙы Башҡортостандың туристик реестрына индерергә тәҡдим итәбеҙ, - ти парламент спикеры Константин Толкачев. - Күптән түгел Ирәмташ эргәһендә урманды ҡырҡыуға бәйле низағ шаһиты булдыҡ. Хәл-торош тап был урындың тейешле статусҡа эйә булмауы һөҙөмтәһендә килеп сыҡты. Урман әҙерләүсе урманды законлы рәүештә ҡырҡа, әммә туристар фекеренсә, ул республиканың матур урындарының береһендә урманды вәхшиҙәрсә ҡыйрата кеүек килеп сыға. Әгәр туристик маршруттар хоҡуҡи йәһәттән тейешенсә билдәләнһә, бындай хәлдәр башҡаса ҡабатланмаясаҡ".

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ҺИНЕҢ ТӨБӘККӘ ЛӘ...

## ҡунаҡтар килә

**3-10 июлдә Башҡортостан Бөтә донъя мәҙәниәт фестивале үҙәгенә әүереләсәк. Былтыр үтергә тейешле, әммә пандемия арҡаһында кисектерелгән Бөтә донъя фольклориадаһына республика быйыл 2 мең самаһы кеше килеүен көтә. Фольклориада ҡунаҡтары Өфөгә Мәскәү аша киләсәк, аэровокзал комплексында уларға ирекмәндәр командаһы ярҙам итәсәк.**

Киң масштаблы проектта 48 ил, шул иҫәптән Австрия, Греция, Мысыр, Израиль, Испания, Кения, Коста-Рика, Непал, Мексика, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Папуа Яңы Гвинея, Панама, Перу, Румыния, Того, Франция, АҠШ, Чили, Швейцария, Эквадор, Эстония һ.б. үҙенең мәҙәниәтен һәм йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен күрһәтәсәк.

Ҡатнашыусылар баш ҡала ғына түгел, 4 округка берләштерелгән 22 муниципалитетта ла сығыш яһаясаҡ: **Үҙәк фестиваль округы** - Салауат ҡалаһы (5 июль), Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм Нуриман районы (6 июль), Октябрьский ҡалаһы (7 июль), Ҡырмыҫҡалы һәм Ауырғазы райондары (8 июль), Ишембай ҡалаһы һәм Благовещен районы (9 июль); **Төньяҡ фестиваль** округы - Мишкә районы (5 июль), Ҡариҙел районы (6 июль), Борай районы (7 июль), Асҡын районы (8 июль); **Төньяҡ-көнбайыш фестиваль округы** - Дүртөйлө ҡалаһы (5 июль), Яңауыл районы (6 июль), Тәтешле районы (7 июль), Нефтекама ҡалаһы (8 июль), Илеш районы (9 июль); **Көнсығыш фестиваль округы** - Әбйәлил районы (5 июль), Бөрйән районы (6 июль), Учалы ҡалаһы (7 июль), Сибай ҡалаһы (8 июль), Белорет ҡалаһы (9 июль).

Концерттарҙан тыш, ойоштороусылар ҡунаҡтар өсөн төрлө күргәҙмәләр, оҫталыҡ дәрестәре, интерактив майҙансыҡтар, ҡатнашыусыларҙың милли кейемдәрҙәге парадын әҙерләгән. Барлыҡ концерт программалары open-air форматында үтәсәк, инеү ирекле, әммә билеттәр мотлаҡ.

"Торатау" Конгресс-холлында 48 илдең оҫталары һәм кәсепселәре үҙҙәренең эштәре менән таныштырасаҡ. Экспозицияға мәҙәни ҡиммәткә эйә биҙәү-ҡулланма сәнғәтенең үҙенсәлекле өлгөләре, халыҡ костюмдары, биҙәүестәр, көнкүреш әйберҙәре инәсәк.

9 июлдә CIOFF-тың Йәштәр координацион комитеты менән берлектә ойошторолған "Донъя халыҡтарының музыка ҡоралдары" фотокүргәҙмәһе эшләйәсәк. Унда төрлө халыҡтарҙың традицион уйын ҡоралдары һүрәттәре күрһәтеләсәк, фотокүргәҙмә менән рус, инглиз, испан һәм француз телдәрендә танышырға мөмкин буласаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Хроник гастрит

❖ Ашҡаҙан һутының кислоталылыҡ кимәле түбән булыуға бәйле гастрит ауырыуын дауалау өсөн әремдең сәскә атҡан баштарынан ҡайнатма һәм төнәтмә әҙерләп эсергә кәрәк. Ҡайнатма өсөн 1 балғалаҡ әҙерләмәгә 1 стакан һыу ҡойоп 1 минут ҡайнатырға, ярты сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда яртышар стакан эсергә. Ә бына төнәтмәне әҙерләүгә 1 ҡалаҡ әҙерләмәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут йылы урында тотоп, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда сирек стакан эсергә.

### Ҡаталау

❖ Ҡаталау менән йонсоғанда иртәнсәк ас ҡарынға, ашарҙан ярты сәғәт алда 1 ҡалаҡ һалҡын температурала һығылған зәйтүн майын эсеп, артынан ярты стакан һыу эсеп ҡуйырға. Шунан һуң бер нәмә лә ашамаҫҡа һәм эсмәҫкә кәрәк. Был дауа эсәктәрҙе таҙарта. Үҙегеҙҙе башта насар тойһағыҙ ҙа, оло ярау нормаға килә. Кәрәк булһа, был рәүешле майҙы төшкө һәм киске аш алдынан да эсергә була.

### Бауыр

❖ Бауыр эшмәкәрлеге боҙолғанда халыҡ дауаһы шифалы календуланан төнәтмә яһарға кәңәш итә. 1 ҡалаҡ ваҡланған календула япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ, дүртенсегә - йоҡлар алдынан эсергә.

### Бауырға май үрһә

❖ Был осраҡта 2-шәр өлөш юл япрағы һәм шинмәҫгөл (бессмертник) япраҡтарын, 3 өлөш һары мәтрүшкә һәм 4 өлөш ромашка сәскәләрен алып, ваҡларға, ҡушып бутарға. Йыйылманың 2 ҡалағын термосҡа һалып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, төнгәләккә ҡалдырырға, һөҙөргә. Көнөнә 3-5 тапҡыр ашағандан һуң яртышар стакан эсергә. Дауаланыу мөҙҙәте - 1,5 ай, йылына 2-3 тапҡыр ҡабатларға мөмкин.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне**

✓ *Ә ул төҙөгән донъя картаһында "ард Башкурт мил аль-атрак" иле, йәғни "Төркиҙәр ҡәбиләһенән булған башҡорт ерҙәре" билдәләнгән. Уларҙа Ҡасра, Масра һәм Ҡараҡуя ҡалалары тамғалана..."*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Урал аръяғының көнсығышындағы таҫтамалдарҙың күп төҫлө биҙәктәренең үҙенсәлеге арҡыры һыҙыҡтар күп булыуы, орнаменттағы фигураларҙың айырымланып тороуы, ҡыҙыл ерлек өҫтөнлөк итеүе менән билдәләнә. Йыш ҡына контурлы булған нескә оя биҙәктәр тура дүртмөйөштәр һәм шаҡмаҡтар эсендә торған. Өҫтәмә ерлек, орнаменттың бер төрлө деталдәре (ике ҡатлы ҡыя шаҡмаҡтар, шаҡмаҡтар, мөйөштәр, шеврондар), төҫтәрҙең тура килеүе Урал аръяғы туҡыусылығына аппликация, сигеү, мозаика һәм көньяҡҡа хас башҡа биҙәү төрҙәре йоғонто яһауы тураһында һөйләй. Мәҫәлән, Сары ауылындағы (Силәбе өлкәһе) таҫтамалдың ҡаймаһында мөйөштәрҙән торған шеврон ҡулланылған (РЭМ, кол. 1002-48). Был мотивтар, ғәҙәттә, ҡымыҙ көбөләре ситен, эйәрҙәр ҡашын, сүмес һәм сеүәтәләрҙең ҡырын, күн муҡса һәм ҡайыштарҙы биҙәгән.



*Тығыҙ ваҡ орнаментлы таҫтамал (Силәбе өлкәһе, Ҡоншаҡ районы, Сары ауылы). РЭМ. XX быуат башы.*

Ҡурған өлкәһендәге таҫтамалдарҙың күбеһенә туҡылған келәмдәрҙә ҡулланылған ҡыя шаҡмаҡтар һуғылған. Ҡыя шаҡмаҡтар ике-өс буйға рәт-рәт булып теҙелгәндәр һәм бер төҫтәге һыҙыҡтар менән ҡаймаланған, өҙлөкһөҙ ҡыя шаҡмаҡ селтәрҙе хасил итәләр. 1912 йылда Силәбе өйәҙе Һарт-Ҡалмаҡ башҡорт аҫаба дайсаһы Арыҫлан ауылында (хәҙерге Ҡурған өлкәһе) С.И. Руденко боронғо ҡыҙыллы-аҡлы таҫтамал киҫәген тап итә - ул ҡыя шаҡмаҡтарҙан торған ваҡ күҙле селтәр менән ҡапланған (РЭМ, кол. 2881-46).



*Туҡылған түй таҫтамалы (Ҡурған өлкәһе, Сафакүл районы, Аҙналы ауылы). Автор фотоһы, 1972*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# ӨФӨ ҠӘЛҒӘҺЕНӘ - 447,

## ә Өфө ҡалаһына нисә йәш?



**Күп һанлы сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Өфөнөң тарихы 1574 йыл менән генә сикләнмәй. Өфө XVI быуаттың 50-се йылдарында уҡ (1554 йыл), йәғни урыҫтар килеп, ҡәлғә төҙөгәнгә тиклем үк, башҡорт ҡалаһы булараҡ билдәле булған. Гәзит уҡыусылар был турала "Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәләләрҙән әҙме-күпме таныш. Өфөнө өйрәнеүсе ғалимдарҙың, тарихсыларҙың гәзитебеҙҙә баҫылған ҡайһы бер сығыштарынан өҙөк килтерәбеҙ. Ҡабатлағандан, доға иҫкермәй, тиҙәрме әле...**

***Күренекле археолог-тарихсыбыҙ Нияз ағай Мәжитов*** үҙенең бар ғүмерен Өфөнөң боронғо Башҡорт ҡалаһының вариҫы булыуын иҫбатлауға арнауын барыбыҙ ҙа белә. "Өфө-II ҡаласығы беҙҙең эраның I быуатында барлыҡҡа килгән. Һәм XIV-XV быуаттарға тиклем йәшәгән, - тип яҙҙы ул. - Был раҫлауҙы ҡаласыҡтағы ҡеүәтле культура ҡатламы менән дәлилләп була. XVIII быуатта бөйөк рус ғалимы Петр Рычков Дим буйы башҡорттары старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев һөйләгәндәргә нигеҙләнеп, хәҙерге Өфө ҡалаһы территорияһында X-XVI быуаттар араһында Имәнҡала тигән башҡорт ҡалаһы урынлашыуы, унда Торахан тигән батшаның хакимлыҡ итеүе, унық бында ҡышҡы айҙарҙа ғына йәшәп, яҙлы-көҙлө Дим, Сәрмәсән буйҙарында йәйләүҙә үткәреүе тураһында яҙып ҡалдыра. Ҡыҙрас Муллаҡаев "Башҡорт тарихы" тигән ҙур китап булыуын һәм уның 1735-1740 йылдарҙа юҡҡа сығыуын да иҫкә алып китә. Ошо тарихи яҙма документтарҙа сағылған мәғлүмәттәр һәм башҡа кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр Өфө-II ҡаласығының VI-XII быуаттарҙа уҡ тарихи Башҡортостандың ҡеүәтле сәйәси һәм мәҙәни үҙәге булыуын, бында хандарҙың ставкаһы тороуын иҫбат итә..."

***География фәндәре докторы, профессор Айбулат Псәнчин*** иһә был хәҡиҡәтте боронғо карталар ярҙамында нығыта: "Башҡортостан, Өфө боронғо карталарҙа нисек барлыҡҡа килгән, тиһәк, тәү сиратта, Италия сауҙагәрҙәре ағалы-ҡустылы Пициганолар 1367 йылда төҙөгән картаға күҙ һалырға кәрәк. Ул картала урта быуатта Италияның, Европа илдәренең Алтын Урҙа менән сауҙа иткән ваҡыты сағылдырылған. Шуға күрә унда Алтын Урҙаның 40-тан ашыу ҡалаһы, Иҙел, Кама буйҙары һүрәтләнгән. Шул иҫәптән бөгөнгө Башҡортостанда Пашхарти ҡалаһы күрһәтелгән. Унан ары тағы бер Пашхарти тигән яҙыу бар. Уныһы башҡорттар йәшәгән ер тигәнде аңлата. Пашхарти ҡалаһы иһә, гидрография яғынан ҡарағанда, Кама, Иҙел буйы тирәһендә урынлашыуы менән бөгөнгө Өфө еренә тура килә. "Өфө" яҙыуы Рәсәй карталарында XVII-XVIII быуаттарҙа барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, Петр Годуновтың 1667 йылғы Себер һыҙмаһында "башкирцы", "Уфа" тип күрһәтелә. Ә Европа сығанаҡтарында Пашхарти (башҡорт) тип яҙыу традицияһы хатта XVIII быуатта ла дауам итә. Йәғни улар, рус картографтарынан айырмалы рәүештә, Өфө тип түгел, ә Пашхарти тип яҙалар.

Был бер булһа, икенсе яҡтан, урта быуаттарҙа был яҡтарҙа йөрөгән Плано Карпини, Вильям Рубрук кеүек сауҙагәрҙәр, сәйәхәтселәрҙең Башҡортостандың ҡайһы еренән үтеп киткәнен белмәйбеҙ. Улар Өфө яғында йөрөгәнме, әллә Каспийға яҡыныраҡ, көньяҡтаныраҡ үткәнме? Әгәр Өфө яғынан үтмәһәләр, башҡорттар йәшәгән илде күреп белгәнгә күрә, Европа картографтары карталарҙа төп ҡаланы ла Пашхарти, йәғни башҡорт ҡалаһы тип билдәләүҙәре ихтимал..."

***Тарихсы һәм тележурналист Салауат Хәмиҙуллиндың*** күп һанлы телевизион фильмдары ла ҡәлғә барлыҡҡа килгәнгә тиклемге Өфө тураһында һөйләй: "Урыҫ йылъяҙмасылары мәғлүмәттәренә таянып, тарихсы Николай Карамзин шулай тип яҙа: "1505 йылда Мөхәммәт-әмин хан вельможаларының береһен, Өфө кенәзен, ниндәйҙер күрһәтмә менән Мәскәүгә ебәрә." (Н. Карамзин. "Рәсәй дәүләте тарихы", IV быуат). 1505 йылда воевода Иван Нагой килгәнгә ҡәҙәре, бында Өфө кенәзе йәшәгән икән, тимәк, бында Өфө лә булған. Мәсьәлә шунда ғына: ул ниндәй рәүештә булған? XIX быуатта Өфө вице-губернаторы Волков тарафынан йыйылған башҡорт риүәйәттәре һәм хәтирәләренә ярашлы, ҡаланың ул саҡтағы хакимы Торахан атлы була. Ул Себер хакимы Күсем хандың Өфөгә хакимлыҡ итергә килгән туғаны була. Урҙа Өфөһөнөң хан йәшәгән "Шайтан ҡаласығы" тип йөрөтөлгән нығытмаһы Торатау тип атала. Археологтар раҫлауынса, был ҡаласыҡта беҙҙең эраның III быуатында уҡ кешеләр йәшәй, ә XVI быуатта ул Өфө хакимының ставкаһына әйләнә. Ҡала үҙе хан һарайынан аҫтараҡ урынлашҡан була.

XII быуатта уҡ әле Иҙриси исемле бер сәйәхәтсе Урал тауҙарында тимер иретеүҙәре менән шөғөлләнеүҙәре тураһында яҙып ҡалдыра. Ә ул төҙөгән донъя картаһында "ард Башкурт мил аль-атрак" иле, йәғни "Төркиҙәр ҡәбиләһенән булған башҡорт ерҙәре" билдәләнгән. Уларҙа Ҡасра, Масра һәм Ҡараҡуя ҡалалары тамғалана..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфөнөң ҡәлғә төҙөлгәнгә тиклемге тарихын раҫлаусы материалдар, документтар ҡул аҫтында ғына, был турала һөйләүсе тарихсыларыбыҙ ҙа бар һәм улар материалдар туплауҙы дауам итә. Әммә баш ҡаланың меңәр йыллыҡ тарихын бар донъяға яңғыратып әйтергә, уны билдәләргә генә ҡыйыулыҡ итә алмайбыҙ һаман...**

*ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ*

# КЕМ ҺИН, БАЯЗИТ ШӘЙЕХ?



**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында билдәле башҡорт дин әһеле, сығышы менән Нуриман районы Яңы күл ауылынан булған Баязит шәйех Хәйруллин шәжәрәһенең исем туйы уҙғарылды.**

Баязит шәйех Хәйруллин 1871 йылда тыуа. Владикавказда хеҙмәт итә, унда үҙен намыҫлы мосолман итеп күрһәтә. Йәш кешенең дини белемен күреп, хәрби часть командиры уны Ырымбур ҡалаһы мәҙрәсәһенә уҡырға ебәрә. Унда өс йыл уҡығандан һуң Баязит Владикавказға ҡайта һәм имам булып китә. 1918 йылда Махачкалаға күсә, унда 1950 йылға тиклем имам булып эшләй, илдең төрлө өлкәләренән килгән бик күп шәкерттәргә Ислам дине һабаҡтары бирә. Рифҡәт Шәйҙуллин әйтеүенсә, Баязит мулланы, ситтә йәшәһә лә, Яңы күл ауылы халҡы онотмай, ҡунаҡҡа ҡайтҡан сағында хөрмәтләп ҡаршы алыр булған. Башҡортостандағы Дағстан диаспораһы етәксеһе Магомедхабиб Султанмагомедов үҙ илендә Баязит Хәйруллиндың исеме диндарҙар өсөн изгеләрҙән һаналыуын белдерҙе. 2016 йылда Махачкаланан йыраҡ түгел Тарки ҡасабаһында шәйехтең ҡәбере яңыртыла, урындағы мәсеттәрҙең береһенә уның исеме бирелә. Ул шулай уҡ бер уңайҙан Зәйнулла ишан Рәсүлевты ла телгә алды, уны ла Дағстан халҡы яҡшы белә, хөрмәт итә, уның исемен дә мәсеттәрҙең береһенә биргән. Әйткәндәй, Баязит Хәйруллин бала сағында тап Зәйнулла Рәсүлевтан дини белем ала.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты аппараты белгесе, тарихсы Нурислам Ҡалмантаев Баязит Хәйруллиндың шәжәрәһе менән таныштырып үтте. Документты ҡоролтай һорауы буйынса Милли архив хеҙмәткәрҙәре әҙерләгән. Шәжәрә шулай уҡ китап рәүешендә лә баҫтырылған, унда архивтарҙа һаҡланған метрик кенәгәләр яҙмалары, халыҡ һанын алыу документтарынан күсермәләр тупланған. Яңы күл ауылында йәшәүсе Ғафуан Хәйруллин олатаһының Баязит шәйехтең бер туғаны булыуын белдерҙе. Данлыҡлы туғаны менән ул бер нисә йыл элек ҡыҙыҡһына башлай, тулыраҡ мәғлүмәт туплауҙа ярҙам һорап, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына мөрәжәғәт итә. Шулай итеп, Баязит шәйех Хәйруллиндың шәжәрәһе төҙөлөп, уның башҡорт милләтенән, сығышы менән Нуриман районы Яңы күл ауылынан булыуы иҫбатлана.

Әйткәндәй, июнь айында Башҡортостан делегацияһы Дағстанға барып, Баязит Хәйруллиндың ҡәберенә зыярат ҡылырға ниәтләй.

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ - БАШҠОРТ БАЙЛАРЫ



Байлар яңы ерҙәренә юрмый, бүләр, йәнәй, йылан, ҡырғыҙ ырыуҙарының рөхсәте менән урынлашҡан. Күрәһең, ошо ырыуҙарҙың башҡорттары, боронғо шәжәрәләрендә күрһәтелә килгән туғанлыҡтарын танып, үҙҙәре биләгән ерҙәрен, бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ, башҡа туғандаш ырыу халҡына бүлеп биргән. Байлар ҙа, бәғзе бер башҡорттар кеүек үк, Ҡаҙан хандарына хәрби хеҙмәткә ялланып, тархан дәрәжәһенә эйә булған. Башҡорт яугирҙары Мәскәү батшаһы вассалы булған Ҡасимов ханлығында ла хәрби хеҙмәттә була. 1539 йылда Темников кенәзе Йәнекәйгә бирелгән рус батшаһы грамотаһында былай тип әйтелә: "...татар из тарханов и башкирцев и можерянов, которые живут в Темникове, судить и ведать их по старине...". Бында, рус традицияһына ярашлы, төрки халыҡтарының барыһын да "татар" тип атау күҙгә ташлана.

Тарихсы-ғалим В.В. Трепавлов билдәләүенсә, XVI быуаттың 30-40-сы йылдарында Ҡаҙан ханы Сафа-Гәрәй, Мәскәү сәйәсәтенә ҡаршылыҡ күрһәтеү маҡсатында, башҡорт биләмәләренә Нуғай ханы кешеләрен күпләп саҡыра башлай. Былары, хан власына таянып, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының Кама, Ыҡ йылғалары буйындағы аҫаба ерҙәрендә үҙҙәрен хужаларса тота башлай, урындағы халыҡты ҡыйырһыта. Улар бындағы ерҙәрҙе үҙҙәренең көтөүлектәре итеп файҙалана. Тап шул осорҙа башҡорт-нуғай ҡапма-ҡаршылығы көсәйеп китә, мәҫәлән, бер риүәйәттә Ыҡ буйында йәшәгән юрмыйҙарҙың йылға аша нуғай нөкәрҙәре менән уҡтан атышыуы бәйән ителә. Әммә нуғай хакимлығы оҙаҡҡа бармай: 1552 йылда Ҡаҙан ханлығы Иван Грозный тарафынан тар-мар ителгәс, нуғайҙар үҙҙәрен элеккесә тота алмай инде. Тап шул ваҡиғаларҙан һуң көньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, рус хакимлығын танып, Мәскәү ҡулы аҫтына инә. Шулай ҙа 1578 йылда нуғай баҫҡынсылары Кама буйында йәшәгән башҡорттарға тағы ла һөжүм итеп ҡарай. Ошо яу хаҡында бер тарихи сығанаҡта ошолай әйтелә: "...свершили набег ... по реке Каме на башкирдцы и на остяки Казанского уезда... И башкирдцы и остяки, собрався, иных побили...".

Байлар ырыуы башҡорттары ла ошо ваҡытта рус протекторатын ҡабул итә.

Улар һуңынан үҙҙәренең аҫаба ерҙәренә раҫлау грамоталарын ала. Байлар олоҫо Бавлы ауылы башҡорттары шәжәрәһендә ошондай мәғлүмәт бар: "Царь Алексей Михайлович-хазрет дал, говорят, нашим предкам грамоту с тем, чтобы они удостоверились в том, что являются башкирами-вотчинниками. Сия грамота была дана нашим предкам по имени Ишбулат и Ильчентай...".

Байлар олоҫо башҡорттары батша хөкүмәте менән булған килешеүҙәрҙә раҫланған дөйөм башҡорт хоҡуҡтарының теүәл үтәлеүе, аҫаба ерҙәренең тейелгеһеҙлеге, дин-рух азатлығы хаҡына бер-бер артлы тоҡанып торған ихтилалдарҙа әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, 1662-1664 йылдарҙағы ихтилал барышында, аманатҡа алынып, Минзәлә острогында тотолған башҡорттар исемлегендә "Байлярские волости, деревни Калмаш Игишко Беиков" теркәлгән, ә аҙаҡтан уға алмашҡа килергә тейешле "Игилик Чермышев", йәниһә уның улы, йә "Тогум Байгильдин" тигән кешеләрҙең исеме бар. Ул йылдарҙа байлар, башҡа башҡорттар менән бер рәттән, ике яҡтан ҡыҫымға алына: бер яҡтан ҡалмыҡтар һөжүм итһә, икенсе яҡтан уларға рус чиновниктары көн күрһәтмәй: "...только де им воровским людем жить на прежних своих кочевьях и их де побьют русские, а только де им отъехать в степь к калмыцким людям и их де калмыки всех похолопят и учнут держать в неволе...".

Ошо ихтилал башҡорттар файҙаһына тамамлана, батша властары уларҙың талаптарын үтәргә һүҙ бирә. Тарихсы С.М. Соловьев былай тип яҙа: "...башкирцы прислали в Москву выборных, которые в приказе Казанского дворца перед боярином Юрием Долгоруким и перед дьяками дали шерть на Коране - от калмыков и ногайцев отстать, возвратиться тою же зимою в Уфимский уезд на прежние жилища, служить государю верою и правдою и отдать всех пленников и все пограбленное. По принесении шерти башкирские выборные видели великого государя очи, "аки пресветлое солнце", и получили жалованную грамоту".

1704-1711 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының күренекле етәкселәре араһында Байлар олоҫонан Дөмәй Ишкәев һәм Ҡураҙман батыр Уразов була. Һуңғыһы, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, башҡорттарҙы 1735-1740 йылдарҙағы ихтилалға күтәреүселәрҙең береһе булып тала.

Пугачев яуы осоронда байлар ырыуы башҡорто Туйхужа Мамыков уның полковниктарының береһе була, улы Шәфи Туйғузин менән билдәле башҡорт яу етәксеһе Ҡаранай Моратов отряды составында ихтилалға ҡушылып, Минзәлә һәм Алабуға ҡәлғәләренә һөжүм ойоштороуҙа ҡатнаша.

Байлар ырыуы башҡорттары араһынан уҡымышлы заттар, дин әһелдәре, мәғрифәтселәр сыға. Бәкчура хандың туранан-тура вариҫы, Ҡара Туймөхәммәт улы Абдрахман, Нәкшбәндиә тәриҡәтенең билдәле суфый шәйехе дәрәжәһен алып, тирә-яҡта танылыу таба. Үҙе лә сығышы менән байларҙан булған билдәле башҡорт тарихсыһы Морат Рәмзи ошо хаҡта бына нисек яҙа: "Шейх 'Абд ар-Рахман ибн Туймухаммад ал-Бикчураи ат-Тайсугани родился в 1102 г. хиджры в селении Муртыш-Тамак, которое относится к городу Мензелинск вилайета Уфа. Расцвет своей молодости он потратил на приобретение знаний и когда достиг степени совершенства в этом, то согласно его способности и старанию, он был назначен преподавателем в селение Тайсуган, относящееся к городу Бугульма в вилайете Самара. Получило от него пользу множество народа, так что его ученики распространились на всем пространстве между Казанью и Оренбургом".

Морат Рәмзиҙең дә нәҫеле, Абдрахман шәйехтеке кеүек үк, тарихи шәхескә - Бәкчура хандың Абдуллабәк исемле улына барып ялғана.

Байлар ырыуы башҡорттарының тағы ла бер арҙаҡлы нәҫеле билдәле - ул Байлар олоҫо Ҡалмаш түбәһенең Күҙәк ауылынан Солтановтар ғаиләһе. Ошо нәҫел башында торған Абдулйәлил Солтанов Башҡорт ғәскәрендә поручик чинын ала, хәрби хеҙмәттәре юғары баһаланып, нәҫелле дворянлыҡ дәрәжәһенә өлгәшә. Уның вариҫтары Мөхәмәтрәхим, Мөхәмәтшәриф, Мөхәмәтсадиҡ, Мөхәмәтлатиф һәм Шаһиморат Солтановтар 30 йыл дауамында XI, XII, XIX башҡорт кантондары начальниктары вазифаһын биләй. Ошо яугирҙар династияһына нигеҙ һалыусы Абдулйәлилдең бүләһе, поручик Мөхәмәдйәр Солтанов, отставкаға сыҡҡас, Ырымбур дини мосолман йыйылышының мөфтие булып китә.

Татарстан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы Аяз Ғиләжев (1928 - 2002) тә сығышы менән байлар ырыуы башҡорттарынан, һәм уның ошо хаҡта мәғлүмәтле булмауы мөмкин түгел - уның олатаһы хаҡында ошондай метрик яҙма һаҡланып ҡалған: "Мензелинского уезда Альметмуллинской волости аулов Сарман и Муртыштамак башкир указной мулла Сахабеддин Гиляжеддин-оглы".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 22-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Ирҙәр үлә, башын һала...

Әйтергә кәрәк, ошо хәтирәләрендә Г.А. Белов һуғыштың ҡайһы бер уңайһыҙ хәлваҡиғаларын урабыраҡ үтә, үҙе командир урынбаҫары булған 8-се атлы корпустың башҡа ике дивизияһының - 21-се һәм 55-се дивизияларҙың аҡрын хәрәкәт итеүе, командование приказына ярашлы, үҙҙәре алдында торған боевой бурысты ваҡытында үтәмәүе арҡаһында хәрби операцияларҙың уңышһыҙлыҡҡа тарыу хәүефе хаҡында бер ни ҙә яҙмай. Ошо ҡан ҡойошло, үлемесле алыштарҙа ҡатнашҡан тағы ла бер күренекле шәхес - 112-се дивизияла политбүлек начальнигы урынбаҫары вазифаһында хеҙмәт иткән Сабир Рәхим улы Ҡадиров үҙенең "Урал бөркөтө" исемле китабында ошо һүҙҙәрҙе юҡҡа ғына яҙмағандыр: "Ләкин корпустың башҡа көстәре, атап әйткәндә, 21-се һәм 55-се дивизиялар һаман килеп етә алмау сәбәпле, башҡорт дивизияһы үҙе ҡамауҙа ҡалды: утарҙа төнәрәк оборона ойоштороп һуғышырға тура килде. Дошмандың контрһөжүмдәрен кире ҡағыуҙа капитан С.Х. Хәбировтың 148-се артдивизионы ҙур уңғанлыҡ күрһәтте, шуның арҡаһында ғына тип әйтерлек дивизия дошманға утарҙы бирмәне... Чернышки беҙҙеке! Дошмандың өс меңлек гарнизоны ҡыйратылды, бик ҙур складтар, хәрби байлыҡтар ҡулға төштө. Морозовск ҡалаһына юл асылды. Ләкин үҙебеҙҙең дә юғалтыуҙар күп, енеү хаҡын ҡан менән түләргә тура килә".

Ошондай ауыр, хәл иткес мәлдәрҙә дивизия командиры, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов үҙе лә яугирҙары менән бергә алғы һыҙыҡта була, уларға дәрт-ҡеүәт биреп тора. Сабир Ҡадиров комдивтың тап ошо һуғыш мәхшәренән ҡатынына яҙып һалған ҡыҫҡа ғына хатын табып, үҙенең китабына индергән. Бына ул хат:

"Ҡәҙерле Оля! Тиҙҙән Еңеүҙе лә байрам итәсәкбеҙ. Ләкин һәләк булғандар тураһында иҫкә алыуы ниндәй аяныс. Данлы Тыуған илебеҙҙең азатлығы өсөн күп ғүмерҙәр бирелде. Минең күҙ алдымда иптәштәр һәләк булды, мин үҙем дә ҡыл өҫтөндә бер генә тапҡыр ҡалманым. Улар тыныс йырҙарҙы инде ишетмәҫ, тыныс тормошто күрә алмаҫ, ләкин Тыуған ил уларҙы онотмаясаҡ. Минең өсөн, Олечка, борсолма: әгәр ҙә ысын дуҫлыҡ, иптәштәр булмаһа, күп тапҡыр ауырыраҡҡа төшөр инем. Донъяла фронташ иптәштән дә шәберәге юҡ.

Михаил. 1.01.1943. Чернышки."

Сталинград фронтындағы яуҙар хаҡында Сабир Ҡадиров теркәп ҡалдырған объектив мәғлүмәттәр дивизиябыҙҙың яу хроникаһын тулыландырыу йәһәтенән бик мөһим сығанаҡ булғанлыҡтан, унан ҡайһы бер өҙөктәрҙе һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ:

"2 - 5 ғинуар. Морозовск ҡалаһы өсөн ҡаты алыш бара. 313-сө полк комиссары Байғужа Сәйетғәлин, генералдың: "Салауат тоҡомдары артҡа сигенмәй!" - тигән оранын ҡабатлап, алға ташлана, оҙаҡ та үтмәй, уның һәләк булыу хәбәре дивизияға тарала...

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Дәүләт телдәрен республика учреждениеларында ҡулланыу хаҡында инструкцияла "кантондарҙа, өйәҙҙәрҙә урындағы халыҡтың күпселеге ниндәй телдә һөйләшә, эш ҡағыҙҙары шул телдә алып барылырға тейеш" тип әйтелә.***

# ТАРИХЫ - талаптар ғына

**2021 йыл башҡа бихисап сәйәси-мәҙәни саралар менән бер рәттән, башҡорт теленең дәүләт статусына эйә булыуына 100 йыл тулыу менән дә әһәмиәтле. Тарихтан мәғлүм булыуынса, башҡорт шәжәрәләре, метрика кенәгәләре ғәрәп графикаһында, йәғни иҫке төрки телендә яҙылған. Бөгөн дә милләттәштәребеҙҙең бер өлөшөнөң һөйләшендә ул һаҡланып ҡалған, әммә диалекттары бығаса рәсми танылмағанлыҡтан, улар "үҙем-башҡорт, телем - татар" тип йөрөргә мәжбүр булды. Был хәл халыҡ иҫәбен алыуҙа ғына түгел, белем биреүҙә, матбуғат баҫмаларын нәшер итеүҙә бөгөн дә бихисап һорауҙар тыуҙыра. Редакциябыҙ ҡунағы, Башҡортостан Республикаһының Милли архивы директоры урынбаҫары, филология фәндәре кандидаты, билдәле йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Терминология хеҙмәте етәксеһе урынбаҫары Ниязбай СӘЛИМОВ менән тарих төпкөлөнән бөгөнгәсә осорҙо байҡайбыҙ.**

**Совет осоронда ижад ителгән "тарих" буйынса, башҡорттар бары тик революциянан һуң ғына уҡырға, яҙырға өйрәнгән, имеш. Әммә бөгөн архивтарҙа һаҡланған документтар быны киреһен раҫлай һәм әгәр башҡорт теле булмаһа, шәжәрәләр, башҡа яҙма сығанаҡтар беҙгә нисек килеп еткән булыр ине һуң?**

- Минең фәнни етәксем, филология фәндәре докторы, профессор Рәйсә Халиҡ ҡыҙы Халиҡованың башҡорт тел ғилеме буйынса хеҙмәттәре бик күп. Ул, Раил Кузеев кеүек, шәжәрә һәм дәүләт акттарының телен өйрәнгән ҙур ғалимә. Заманында Мәскәүҙә уҡып ҡайтҡан бик мәғлүмәтле, тәрән ғилемле телсе ине ул. Рәйсә Хәлил ҡыҙының әйткәндәре һаман да иҫемдә: беҙҙең телебеҙ борондан килә, уның йылъяҙмаһы - милләтебеҙ тарихы менән бәрәбәр. Башҡорт халҡы 1917 йылдан һуң ғына уҡырға, яҙырға өйрәнгән, тигән фекер - торғаны бер әкиәт! Революцияға ҡәҙәр ҙә башҡорт халҡы уҡый ҙа, яҙа ла белгән. Батша Рәсәйе ваҡытында уҡ башҡорттар Санкт-Петербургта, Мәскәүҙә, хатта сит илдәрҙә лә белем алған - был хаҡта архив документтары асыҡ һөйләй.

Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: башҡорт ырыуҙарының Рус дәүләте составына инеүе тураһында фәҡәт шәжәрәләр һөйләй (башҡа төрлө документтар юҡ). Улар беҙгә бик мөһим тарихи мәғлүмәтте ата-бабалар телендә - иҫке төрки телендә еткерә.

Ата-бабаларыбыҙ лөғәте, йәғни иҫке төрки теле элементтары хәҙерге көнгәсә башҡорт һөйләштәрендә һаҡланып ҡалған: мәҫәлән, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары *жиләккә жәйәү барҙым тип һөйҙәй*, Дим буйы, Ырғыҙ буйы башҡорттары *ҫыуҫаным, ҫыу бирегеҙ әле,* ти. Ҡатайҙарҙы, табындарҙы - *анта, мынта, тегентә* тиеүенән танырға була. Иң ҡыҙыҡ һәм үҙенсәлекле күренеш - ул да булһа, республикабыҙҙың урта өлөшөндә йәшәгән халыҡ (табын ҡәбиләһе вәкилдәре) менән бөгөн республиканың төньяҡ-көнбайышында йәшәгән башҡорттар һөйләшендәге уртаҡ морфологик аффикстар. Мәҫәлән: беҙ аттар килә, тимәйбеҙ, *атлар килә,* тип һөйләйбеҙ. Әҙәби тел буйынса малайҙар, ҡыҙҙар тип яҙырға тейешбеҙ, әммә һөйләгәндә *малайлар, ҡыҙлар,* тибеҙ. Ошо *-лар, -ләр* ялғауы әҙәби тел ҡабул ителгәндә лә билдәле булған. Был турала мин күп яҙғаным, сығыш яһағаным булды: башҡорт нисек һөйләй - шулай яҙырға тейеш.

Башҡорт теле лексикаһына һәм грамматикаһына 70-80 йыл эсендә ни бары дүрт тапҡыр үҙгәреш һәм асыҡлыҡ индерелгән. Ә бит тел даими үҫә, байыға. Әҙәби телгә яңынан-яңы һүҙҙәр килеп тора. Тик башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән терминдарҙың күбеһе туған телебеҙҙең бәҫен ебәрә, саф башҡорт теленең һутын юҡҡа сығара... Радио-телевидение һәм гәзит-журналдар теле ошо әрһеҙ инглиз терминдары менән йылдан-йыл сыбарлана бара - шуныһы әсендерә.

**Хәҙерге заманда башҡорт теле тигәндә әҙәби телде генә күҙ алдына килтерәбеҙ һәм шунлыҡтан үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа үҙебеҙ балта сабабыҙ кеүек. Тарихи документтар буйынса, әҙәби тел ҡабул ителгәнгә тиклем үк башҡорт теленә дәүләт теле статусы биреү, уны рус теле менән бер рәттән уҡытыу тураһында мәсьәлә күтәрелә. Әйҙәгеҙ, булмаһа, тағы бер ошо тарихҡа байҡау яһап, хәтерҙе яңыртып үтәйек.**

- Ысынлап та, 1917 йылдың 20-27 июлендә Ырымбурҙа үткән I Бөтөн башҡорт съезында тәүләп башҡорт телен мәктәптәрҙә урыҫ теле менән бер ҡатар уҡытыу кәрәклеге хаҡында ҡарар ҡабул ителә. Әгәр башҡорт әҙәби теле булмаған икән, уны уҡытыу тураһында һүҙ булыр инеме? Әммә был уй-ниәтте ғәмәлгә ашырыу ғына оҙаҡҡа һуҙыла. Бары тик Башҡортостан автономияһы төҙөлгәс кенә башҡорт теле мәсьәләһенә иғтибар көсәйә. 1919 йылдың 3 декабрендә Башревком Юстиция буйынса халыҡ комиссариатына республика биләмәһендә дәүләт телен индереү хаҡында шартнамә эшләргә фарман бирә.

1920 йылдың мартында Башревком ултырышында Юстиция буйынса халыҡ комиссариатының башҡорт телен дәүләт теле сифатында ғәмәлгә ашырыу тураһындағы доклады тыңлана, башҡорт теленең статусын билдәләү буйынса тейешле документтар әҙерләү бурысы йөкмәтелгән комиссия төҙөлә.

Артабан ошо уҡ айҙа комиссияның эш йомғаҡтары буйынса Башҡортостан биләмәһендә башҡорт һәм урыҫ телдәрен дәүләт телдәре тип иғлан итеү хаҡында шартнамәне раҫлаған ҡарар ҡабул ителә. Ләкин тиҙҙән Башревком тарҡатылыу сәбәпле, был ҡарар ҙа бойомға ашмай ҡала.

Ниһайәт, 1921 йылдың 6 июнендә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты Президиумы башҡорт телен урыҫ теле менән бер ҡатар дәүләт теле тип иғлан итеү һәм уларҙы учреждениеларҙағы эш ҡағыҙҙарында ҡулланыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Был тарихи документҡа Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты Президиумы рәйесе Шәһит Хоҙайбирҙин һәм сәркәтибе Әтфиғолов ҡул ҡуя. Ҡарар республика ойошмалары, предприятиелары һәм ойошмаларына барлыҡ эш ҡағыҙҙарын ике телдә алып барыуҙы йөкмәтә, Халыҡ мәғарифы комиссариатына кәнсәләр хеҙмәткәрҙәрен башҡорт теленә өйрәтеү буйынса курстар асыу һәм башҡа бурыстарҙы ғәмәлгә ашырыу эштәре ҡушыла.

Тел өлкәһендә эш артабан да туҡталып ҡалмай, ул эҙмә-эҙлекле дауам итә. Бер йылдан һуң, 27 июндә РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты пленумы, урыҫ теле менән башҡорт телен дәүләт телдәре булараҡ танып, туған телде республиканың барлыҡ уҡыу йорттарында ла өйрәнеү хаҡында ҡарар сығара. Июлдә иһә Советтарҙың II Бөтөн башҡорт съезы был ҡарарҙы юридик йәһәттән нығытып ҡуя: "дәүләт төҙөлөшөндә башҡорт ярлыларының ҡатнашыуын еңеләйтеү маҡсатында, башҡорт телен урыҫ теле менән бер нәүбәттә дәүләт теле тип танырға". Шулай итеп, ҡатмарлы һәм оҙайлы юл үтеп, башҡорт теле дәүләт статусына эйә була.

Шул уҡ йылдың сентябрендә БАССР-ҙың Халыҡ Комиссарҙары Комитеты дәүләт телдәрен республика учреждениеларында ҡулланыу хаҡында инструкцияны халыҡҡа еткерә. Унда, атап әйткәндә, "кантондарҙа, өйәҙҙәрҙә урындағы халыҡтың күпселеге ниндәй телдә һөйләшә, эш ҡағыҙҙары шул телдә алып барылырға тейеш" тип әйтелә.

1921-1922 йылдарҙа Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе һәм РКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты секретары вазифаларын башҡарған, 1924 йылда иһә БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе булып эшләгән Шәһит Хоҙайбирҙин төбәктә аслыҡ хөкөм һөргән ваҡытта, сәйәси-ижтимағи һәм социаль-иҡтисади йәһәттән үтә ҡатмарлы шарттарҙа, башҡорт теленең яҙмышын ыңғай яҡҡа бороп ебәреүгә ғәйәт ҙур көс һала. Уның етәкселегендә башҡорт әҙәби теле нормаларын булдырыу һәм, республиканың дәүләт теле булараҡ, уны дәүләт органдарында, йәғни эш ҡағыҙҙарында ҡулланыу буйынса эҙмә-эҙлекле эш алып барыла. Был йылдарҙа әҙәби башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен киңәйтеүгә йүнәлтелгән байтаҡ фарман ҡабул ителә. 1923 йылда Шәһит Хоҙайбирҙинды Башҡорт телен ғәмәлгә ашырыу комиссияһы рәйесе итеп тәғәйенләп ҡуялар. Әммә ул осорҙа Академик үҙәк хеҙмәткәрҙәренең бәғзеләре, башҡорт әҙәби теле татар теленә бик яҡын булмаһын, тигән сәйәсәт алып бара. Һөҙөмтәлә республиканың төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының тел үҙенсәлектәре әҙәби телдә сағылыш тапмай. Ахырҙа, Бәләкәй Башҡортостан биләмәһендә йәшәгән башҡорттарҙың ҡыуаҡан һөйләше генә башҡорт әҙәби теленә нигеҙ итеп алына. 1922 йылда Өфө губернаһы менән Бәләкәй Башҡортостан ҡушылып, Оло Башҡортостан барлыҡҡа килгәс, башҡорт әҙәби теле үҙгәрешһеҙ ҡала. Пермь, Бөрө, Бәләбәй өйәҙҙәрендә йәшәгән бик күп башҡорттарҙың һөйләше, йәғни теле башҡорт әҙәби телендә сағылыш тапмай. Нәҡ ошо сәбәп арҡаһында "с" өнөн ҡушып һөйләшкән йөҙәр меңләгән милләттәшебеҙ тора-бара "татар" булып китә һәм, йылдар үткәс, "баш калам - Казан", "туган телем - татар" тип мәктәптә белем ала башлай.



***Башҡорт теле дәүләт теле булып иң беренсе Конституцияға индерелеп, артабанғы йылдарҙа сәйәси сәбәптәр арҡаһында төшөрөп ҡалдырылһа ла, 1999 йылда ҡабул ителгән "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" Закон, уҙған быуаттың 20-се йылдарында уҡ республика халыҡтары телдәренә ҡарата билдәләнгән хоҡуҡтарҙы раҫлап, башҡорт һәм урыҫ телдәрен дәүләт телдәре тип иғлан итте. Шулай уҡ 2002 йылда яңы редакцияла ҡабул ителгән республиканың Төп Законы туған телебеҙҙең статусын урыҫ теле менән бер ҡатар нығытып ҡуйҙы.***

**Шул замандарҙа уҡ был проблема хаҡында белгәндәрҙер бит? Уны төҙәтеү буйынса ниндәйҙер аҙымдар яһалғанмы?**

- 1924 йылда билдәле дәүләт эшмәкәре Ш. Хоҙайбирҙин "Башҡортостан хәбәрҙәре" гәзитендә "Нисек яҙырға?" тигән мәҡәлә баҫтыра һәм, ни өсөн Оло Башҡортостан биләмәһенең төньяҡ-көнбайыш райондарында йәшәгән халыҡтарҙың тел үҙенсәлектәре беҙҙең әҙәби телгә нигеҙ итеп алынмаған, тигәнерәк һорау ҡуя. Пермь крайында йәшәгән башҡорттар, төньяҡ-көнбайыш ырыуҙарының һәммәһенең дә теле ошо башҡорт әҙәби теле нигеҙенә индерелергә тейеш, тип яҙа ул. Әммә Петроградты һаҡлағанда алған яраһы аҙып китәме, организмы әүҙем эшмәкәрлекте күтәрә алмаймы, йә иһә башҡа сәбәп буламы - 1924 йылдың ноябрендә уны Мәскәү дауаханаһына оҙаталар. Декабрҙә иһә башҡорт әҙәби теле, уның дәүләт статусы өсөн йәнен аямай көрәшкән, башҡорт жур-

**✓ Иң мөһиме - тәүге Башҡортостан Хөкүмәте сығарған ҡарарҙарҙы, документтарҙы бер кем дә ғәмәлдән сығармаған, хатта башҡорт теленең юридик көсө быуаттан ашыу инде Башҡортостан тигән исемдә лә сағылыш таба.**



налистикаһына, башҡорт архивы эшенә нигеҙ һалған оло шәхесебеҙ кинәт вафат була... Был аяныслы хәлдең сәбәптәре күптәрҙә һаман да һорау тыуҙыра.

Тарихтан мәғлүм: Башҡортостан йөшәһен тип йән аткан байтаҡ арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе уҙған быуаттың 20-30-сы йылдарында Мәскәү кимәлендә эшкә "үрләтәләр". Ләкин уларҙың береһе лә Башҡортостанға кире әйләнеп ҡайта алмай. Ошо осорҙа, илдә сәйәси золом киң ҡолас алғанда, илем, тыуған ерем, туған телем тип янып-көйөп йәшәгән рухлы зыялыларҙың башын ашайҙар. Әгәр Шәһит Хоҙайбирҙин йәшләй вафат булмаһа, иманым камил, Башҡорт телен ғәмәлгә ашырыу комиссияһы рәйесе булараҡ, ул әҙәби телебеҙҙе тейешенсә формалаштырыу эшен ослап ҡуйыр ине! Икенсе төрлө әйткәндә, көньяҡ һәм көнсығыш диалекттар менән бер нәүбәттә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары теле лә, һис шикһеҙ, телдәрен дәүләт телдәре тип иғлан итә. Башҡортостан автономияһының төп законында, атап әйткәндә, башҡорт телен съезд, йыйылыш, суд эштәрендә, идара итеүҙә, ижтимағи тормошта, мәктәптә белем биреүҙә ҡулланыу хаҡында әйтелә. Үкенескә күрә, уҙған быуаттың 30-сы йылдарында тел өлкәһендәге сәйәсәт үҙгәрә башлай: 1937 һәм 1978 йылдарҙа ҡабул ителгән республика конституцияларында башҡорт теленең рәсми статусы нығытылмай. Сәбәбе аңлашылалыр: милләтселектә һәм башҡа сәбәптәр буйынса ғәйепләнеп, күп яҙыусылар һәм ғалимдарҙың ғүмерҙәре ҡыйыла.

**Нисек кенә булмаһын, башҡорт теленә дәүләт статусы бирелгәндән һуң артабанғы йылдарҙа Башҡортостанда төп милләт теленә иғтибар кәмемәй: гәзит-журналдар, китаптар туған телдә нәшер ителә, башҡорт теле мәктәптәрҙә уҡытыла, радио аша** урыны тигәндә аңлата. Башҡортостан тигәндә башҡорттоң барлыҡ булмышы, тарихы һәм бөгөнгөһө сағылыш таба, уның дәүләт кимәлендәге туған теле бар икәнлеген аңлата.

**Башҡорт теле, башҡорт телен һаҡлау, уны уҡытыу, үҫтереү, ҡулланыу даирәһен киңәйтеү мәсьәләләре бер ваҡытта ла көнүҙәк булыуҙан туктағаны юҡ, шикелле...**

- Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында башҡорттар саҡ баш ҡалҡыта башланы һәм шуларҙың береһе - төньяҡ-көнсығыш вәкиле, башҡорт теле өсөн йәнен фиҙа ҡылған күренекле ғалим Таһир Байышев була. Ул да, йәне әсеп, Шәһит Хоҙайбирҙинды борсоған мәсьәләләргә күтәрә, төплө ғилми тикшеренеүҙәр алып бара, башҡорт теле диалекттары буйынса диссертация яҡлай. Башҡорт әҙәби теләндә төньяҡ-көнбайыш диалектының сағылыш тапмауына ризаһыҙлыҡ белдерел, КПСС-тың Өлкә Комитетына төбәгендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең яҙмышына, атап әйткәндә, уларҙың теленә диҡҡәт ителеүе һөйөнөслө хәл. Шул уҡ ваҡытта күршеләребеҙҙең был хәлгә ныҡ көйөнөүе лә беҙгә мәғлүм. Ниндәйҙер кимәлдә бөгөн сәйәси төҫкә мансыла барған был ҡырҡыу мәсьәлә хаҡында байтаҡ йылдар элек шәхсән минә, шул төбәк райондарында нәшер ителгән гәзиттәрҙең мөхәррирҙәре кәңәшмәһендә ҡатнашып, үҙ фекеремде менән уртаҡлашырға насип булғайны. Журналистар ҡоронда беҙҙең тарафтан, айырым мәҡәләләрҙә, гәзит уҡыусыларҙың хаттарын һәм ижад емештәрен диалект телендә, йәғни урындағы туған телдә бирергә кәрәк, тигән тәҡдим әйтелгәйне. Был, беренсенән, төбәк теленең башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты икәнлеген таныу тип ҡабул ителһә, икенсенән, диалект һүҙҙәре башҡорт әҙәби теленең лексик байлығын арттырыуға булышлыҡ итер ине.

# БЕР БЫУАТЛЫҠ,

## заманса

әҙәби телгә нигеҙ итеп алыныр ине. Ҡыҙғаныс...

Ҡыҫҡаһы, уҙған быуаттың 20-се йылдарында с менән ч хәрефтәре тирәһендә барған бәхәс сәйәси төҫ ала. Әйтерһең дә, башҡорт телендә был өндәр бөтөнләй булмаған! Ни өсөн һуң Салауат тигән исемдә с хәрефе үҙгәрмәгән, уны ла Ҫалауат, Сәкинәне Ҫәкинә, сәйҙе ҫәй, самауырҙы ҫамауыр тип әйтергә кәрәк булған түгелме? Ҡабатлап әйтәм: з, с, ч хәрефтәре боронғо шәжәрә телендә әүҙем ҡулланылған, улар башҡорт теленең ят түгел, ә үҙ өндәре!

**Һәр яҡшы нәмә - ул онотолған иҫке күренеш, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Бөгөн беҙ ҡасандыр онотолорға мәжбүр ителгән хәҡикәтте тергеҙергә тырышабыҙ...**

- Әйткәндәй, 1917 йылдарҙа ҡабул ителгән ҡарар-фекерҙәр бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған. 1923 йылдың декабрендә партияның Башҡортостан өлкә комитеты президиумы ултырышында башҡорт теленең дәүләт статусын эш ҡағыҙҙарында ғына түгел, матбуғат, нәшриәт, мәғариф һәм сәнғәт өлкәләрендә лә ғәмәлгә ашырыу мәсьәләһе тикшерелә. 1924 йылдың 9 авгусында Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты хөкүмәт ҡарарҙарын мотлаҡ ике дәүләт телендә - башҡорт һәм урыҫ телдәрендә - нәшер итеү хаҡында ҡарар ҡабул итә. Был документ республикабыҙҙа башҡорт теленең дәүләт статусын раҫлауҙа мөһим аҙым була. Республикабыҙҙың 1925 йылда ҡабул ителгән тәүге Конституцияһы башҡорт һәм урыҫ

**яңғырап тора. Ләкин рәсми даирәлә уны ҡулланыу онотола...**

- 1993 йылда ҡабул ителгән Төп Законда ла башҡорт теленең статусы хаҡында бер ни ҙә әйтелмәй, шул уҡ ваҡытта республика Президенты вазифаһына дәғүә итеүсенең мотлаҡ башҡорт телен белеүе тәҡрарлана. Хәйер, уҙған быуаттың 20-се йылдарында уҡ дәүләт теле исемен алған башҡорт теленән был статусты бер кем дә мәхрүм итмәгән. Сөнки был тел - республикаға исем биргән төп халыҡтың, йәғни аҫаба милләттең туған теле.

Башҡорт теле дәүләт теле булып иң беренсе Конституцияға индерелеп, артабанғы йылдарҙа сәйәси сәбәптәр арҡаһында төшөрөп ҡалдырылһа ла, 1999 йылда ҡабул ителгән "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" Закон, уҙған быуаттың 20-се йылдарында уҡ республика халыҡтары телдәренә ҡарата билдәләнгән хоҡуҡтарҙы раҫлап, башҡорт һәм урыҫ телдәрен дәүләт телдәре тип иғлан итте. Шулай уҡ 2002 йылда яңы редакцияла ҡабул ителгән республиканың Төп Законы туған телебеҙҙең статусын урыҫ теле менән бер ҡатар нығытып ҡуйҙы.

Иң мөһиме - тәүге Башҡортостан Хөкүмәте сығарған ҡарарҙарҙы, документтарҙы бер кем дә ғәмәлдән сығармаған, хатта башҡорт теленең юридик көсө быуаттан ашыу инде Башҡортостан тигән исемдә лә сағылыш таба. Башҡортостан - ул башҡорт иле, башҡорттар йәшәгән төбәк, башҡорт теленең ҡулланылыу мөрәжәғәт итә. Әммә тейешле яуап алмағас, тота ла Мәскәүгә, КПСС Үҙәк Комитетына хат яҙа. Ни өсөн һаман да төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының теле иҫәпкә алынмай, тип мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуя. Ул төбәк өсөн айырым тел булдырыу, башҡорттарҙы көсләп ассимиляциялаштырыу, башҡорттар, бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары араһынан милли кадрҙарҙы үҫтереү, Союҙдың башҡа төбәктәрендә йәшәгән башҡорттар тураһында хәстәрлек күреү кеүек ҡырҡыу мәсьәләләрҙе күтәрә. Хат, әлбиттә, Башҡортостан Өлкә Комитетына төшөрөлә. Өлкә Комитет Таһир Байышевтың был мөрәжәғәтен ялыу тип баһалай - хатты тикшереүҙе бюро ултырышына ҡуялар. БР Милли архивында ошо бюро ултырышының протоколы һаҡлана. Әлбиттә, ул заман рухына ярашлы, барыһы ла Таһир Байышевты ғәйепләй, власҡа ярамһаҡланыусылар ҙа, өҫтән төшкән күрһәтмә буйынса сығыш яһаусылар ҙа була. Был хаҡта Байышев "минең граждандыҡ хоҡуҡтарымды аяҡ аҫтына һалып тапаныҙ" тип белдерә. Заманында тел, ил, милләт тип янған көслө рухлы телсе-ғалим Таһир Байышевтың хеҙмәттәре һәм уй-фекерҙәре бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған.

**Ысынлап та, әүәл башҡорт әҙәби теленә генә иғтибар бирер, уның диалекттарына бөтөнләй диҡҡәт ителмәгән. Ошо арҡала иҫке төрки теленә яҡын телдә һөйләшкән милләттәштәребеҙҙе үҙебеҙ уҡ ситкә тибәрҙек булып сыға түгелме?**

- Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайыш Бер килке эш ошо юҫыҡта һәйбәт кенә барҙы, әммә... Беҙҙә бит күп ваҡыт изге эштәр йә ярты юлда туҡтап ҡуя (дөрөҫөрәге, туҡтатып ҡуйыла), йә бөтөнләй төбө-тамыры менән юҡҡа сығарыла. Күпме халыҡты һөйөндөрөп, даими нәшер ителеп килгән төньяҡ-көнбайыштағы башҡортса төбәк гәзиттәре хәҙер ҡайҙа? Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының телен юғары кимәлгә күтәреүгә булышлыҡ иткән, уларҙың милли рухына яңы һулыш өҫтәгән гәзиттәрҙе (төп район гәзитенең ҡушымтаһы рәүешендә булһа ла) мотлаҡ тергеҙергә һәм башҡорт әҙәби телен байытыу, ошо төбәктәрҙең асылын һаҡлап ҡалыу өсөн шул телдә айырым мәҡәләләр, шиғырҙар, хикәйәләр баҫтырырға тейешбеҙ. Республиканың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлығы элек ебәрелгән хатаны төҙәтер, ә был йәһәттән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты ярҙам ҡулы һуҙыр, тип ышанайыҡ.

**Һеҙ - оҙаҡ йылдар Башҡортостан Республикаһының Терминология хеҙмәте етәксеһе урынбаҫары ла. Был хеҙмәт башҡорт әҙәби телен генә түгел, уның диалекттарын да һаҡлау һәм яҡлау буйынса шөғөлләнергә тейештер, моғайын. Ғөмүмән, Терминология хеҙмәтенең идеаль эшмәкәрлеге ниндәй булырға тейеш?**

- Башҡорт тарихы йылында, башҡорт әҙәби теленә дәүләт статусы бирелеүгә 100 йыл тулыу айҡанлы, туған телебеҙ өлкәһендә ҙурыраҡ кимәлдә эштәр тормошҡа ашырылырға, төрлө фәнни-ғәмәли конференциялар, маҡсатлы саралар үткәрелергә тейеш. Иң мөһим бурыс - әҙәби телебеҙҙең торошона һәм уны артабан үҫтереүгә арналған Бөтөн Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһын үткәрергә кәрәк, тип иҫәпләйем.

Ғөмүмән, Терминология хеҙмәтенең эшмәкәрлеге киң ҡырлы: ул телебеҙҙең лексик ҡатламына ниндәй терминдар килеп кереүен даими күҙәтеп барырға, урам, ойошма исемдәренең, йәғни алтаҡталарҙың дөрөҫ яҙылышын контролдә тоторға, гәзит-журнал, радио һәм телевидение теленә лә диҡҡәт итергә бурыслы. Беҙҙең бурыс - төрлө даирәлә ҡулланылған туған телебеҙҙең сафлығын һаҡлауға ирешеү.

Ләкин шуныһы бәкәлгә һуға: тәржемә эшендә үҙешмәкәрлек менән шөғөлләнһәк, алтаҡталарҙағы хаталар ғүмерҙә лә бөтмәйәсәк. Әйтәйек, күп ҡала һәм райондарҙа, нигеҙҙә, мәктәпкә мөрәжәғәт итәләр, ундағы башҡорт теле уҡытыусыһы тиҙ генә тәржемә эшләп бирә. Редакцияларҙа ла тәржемә менән булалар, йәғни был яуаплы эш менән кем тура килә - шул шөғөлләнә. Республикала Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Башҡортостан Фәндәр академияһы бар, беҙҙәнсә, уларҙың икеһенең береһе ҡарамағында Тәржемә үҙәген ойоштороу - күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Заманында бындай үҙәкте Әхтәр Боҫҡонов ойошторғайны, әммә уның эше туҡтатылып ҡалды. Ошондай төп ойошма булмай тороп, тел һәм тәржемә өлкәһендәге эшебеҙ тейешенсә бармаясаҡ. Кәмендә биш белгес-телсенән торған махсус ойошма даими эш башҡарып, Терминология хеҙмәтенә ҡарау һәм раҫлау өсөн терминһүҙҙәр исемлеген тапшырырға тейеш. Эште ошолай Хөкүмәт кимәлендә ойошторғанда ғына туған телебеҙҙә даими осрап торған хаталарҙан арына аласаҡбыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бөгөн уҡытыусылар, табиптар, башҡа белгестәр белемен даими рәүештә камиллаштырып тора. Ә ни өсөн телебеҙ һағында торған телселәрҙең, башҡорт теленең байлығын ҡурсалаусылар - район-ҡала гәзиттәре, журнал мөхәррирҙәре, радио-телевидение журналистары, район-ҡала хакимиәттәре ҡарамағындағы дәүләт телдәрен тормошҡа ашырыу буйынса комиссияларҙың яуаплы хеҙмәткәрҙәре өсөн бындай курстар юҡ? Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһында шундай махсус курстар ойоштороу мотлаҡ. Бындай тәҡдимдәр күптән әйтелә килә, әммә ни сәбәптәндер һаманғаса хәл ителмәй", - тип тә борсолоуын белдерҙе телсе-ғалим Ниязбай Булатбай улы Сәлимов. Ысынлап та, бөгөн тел һағында тороусыларға заман яңы талаптар ҡуя, әммә талап итер алдынан уларға был белемде һалырға һәм һәр аҙымынды заман менән бергә баҫып өйрәтергә, ә бының өсөн ныҡлы нигеҙ булдырырға кәрәк.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

✓ *Сергей Рыбаков башҡорт йырҙарының киңлегенә һәм фәлсәфәүи йөкмәткеһенә, импровизаторлыҡ һәләтенә эйә йыраусы, ҡурайсыларҙың күп булыуына һоҡлана.*



*МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ*

*Әгәр ҙә һин ысын башҡорт булһаң,*
*Йырлап күрһәт миңә "Урал"ды…*
*Назар Нәжми.*

**"Башҡорт халҡының милли характеры бигерәк тә оҙон көйҙә тәрән һәм тулы бирелгән, уның тормошо һәм яҡты киләсәк өсөн көрәше асыҡ сағылдырылған. Шуға күрә оҙон көй бер үк ваҡытта милли эпос та ул: башҡорт халҡы бай ваҡиғалар менән тулы тарихын үҙенең оҙон көйҙәрендә сағылдырып барырға тырышҡан. Халыҡтың уйҙарын, тойғоларын камиллашҡан формала кәүҙәләндереү һәм уның милли үҙенсәлектәрен дөйөмләштереү көсө, музыкаль һәм поэтик оҫталыҡ дәрәжәһенең юғары булыуы, шулай уҡ традицияларының хәҙерге көндә лә йәнле үҫеше - былар бөтәһе лә оҙон көйҙө башҡорт халҡының музыкаль-поэтик классикаһы тип атарға мөмкинлек бирә", - тип яҙылған "Башҡорт халыҡ йырҙары" (төҙөүселәре - Ә. Харисов, Х. Әхмәтов, Л. Лебединский. Өфө, 1954) йыйынтығының баш һүҙендә. Оҙон көйгә бынан да тулыраҡ һәм теүәлерәк баһа биреү мөмкин түгелдер ҙә: "Оҙон көй бер үк ваҡытта милли эпос та ул. Оҙон көй - башҡорт халҡының музыкаль-поэтик классикаһы".**

# ҺӘР БАШҠОРТ ОҘОН КӨЙ БАШҠАРҺА,

## тарихы юғалмаясаҡ, киләсәге лә буласаҡ!

Оҙон көй маһирҙарын ололап, йыраусы тигәндәр. 1907 йылда Вена ҡалаһында сыҡҡан "Яңы азат матбуғат" гәзитенең 24 ноябрь һанында ("Башҡортостандың ҡыҫҡа энциклопедияһы"нан килтерелә, 423-сө бит) шундай юлдар бар: "Башҡортостандың үҙенсәлеге - башҡорттоң яҙмышы, иҙелеүгә ҡаршы, азатлыҡ өсөн данлы көрәше тураһында һоҡланғыс поэтик юғарылыҡта әҫәрҙәр ижад иткән йыраусыларҙың күплегендә".

Билдәле булыуынса, башҡорт халҡы борондан тарихи ваҡиғалар айҡанлы йыйынға йыйыла торған булған. Илгә дошман килһә, ҡулға ҡорал алып яу сабырға ҡарар ҡабул иткәндәр, ә инде яуҙа еңеп ҡайтҡан батырҙар хөрмәтенә ҡобайырҙар, көйҙәр, йырҙар сығарғандар, ҡурайсылар, йыраусылар, бейеүселәр, сәсәндәр бәйгеләре үткәргәндәр. 1770 йылдарҙа Башҡортостан буйлап сәйәхәт иткән академик И.Лепехиндың (1740-1802) юлъяҙмаларынан (фольклорсы-ғалим Салауат Галиндың "Башҡорт халҡының йыр поэзияһы" китабынан килтерелә. Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө - 1979 ): "Ул үҙенең ата-бабаларының данлы эштәре тураһында йырланы. Башҡорттар уларҙы батырҙар тип атай. Йырсы ата-бабаларының тормошондағы онотолмаҫлыҡ нәмәләрҙе йырлау менән генә сикләнмәне, ә тауыш һәм тән ҡыланыштары менән уларҙың бөтә хәрәкәттәрен: нисек итеп үҙҙәренең иптәштәрен өгөтләгәндәрен, нисек яуға кергәндәрен, нисек дошманды үлтергәндәрен, нисек яраланғандан һуң вафат булғандарын һүрәтләне. Быларҙың барыһын да йырсы ҡарт шул тиклем йәнле итеп күрһәтте, хатта күптәр иланы".

Тыныс тормошта ла бындай бәйгеләр үткәрелә торған булған. 1944 йылда Ғата Сөләймәнов мәшһүр ҡурайсы, йыраусы, бейеүсе Ғиниәт Ушановтан элекке бәйгеләр тураһында мәғлүмәт яҙып алған: "Тамьян-Ҡатай кантоны башлығы, үҙ кантонындағы ҡурайсы, йырсы һәм бейеүселәрҙе саҡырып, ярыш уҙғармаҡсы булған. Бының өсөн улыс башлыҡтарына хәбәр иткән, ә улыс башлыҡтары үҙ ҡарамағындағы ауылдарға ҡурайсы, йырсы һәм бейеүселәренә хәбәр иткән. Ярышта алдын сыҡҡан ҡурайсыға дүнән, йырсыға ҡонан ат, бейеүсегә һарыҡ тәкәһе бүләк ителәсәк, тип иғлан тараҡҡандар. Йыраусы башта үҙе теләгән көйҙө йырларға, унан тикшереп ултырыусылар әйткән бер көйҙө йырларға тейеш булған. Йырлаған ике көйҙө лә дөрөҫ башҡарһа, ул икенсе баҫҡыс ярышында ултырып ҡалған. Әгәр ҙә көйҙөң береһен дөрөҫ йырлап, икенсеһен яңылыш йырлаһа йәки белмәһә, тимәк, ул киләһе ярышҡа үтә алмай, тигән һүҙ. Икенсе баҫҡыстың шарты шул булған: тикшереп ултырыусылар бер көй исемен әйтә, башҡарыусы шуны вәзене, аһәңе менән йырларға һәм икенсе көйҙөң тарихын һөйләп бирергә тейеш. Йыраусы ошо талаптарҙың береһен үтәй алмай икән, ул ярыштан төшөп ҡала. Өсөнсө шарт: тикшереүселәр яңы ике көй йырларға һәм бер көйҙөң тарихын һөйләп бирергә ҡушыр, тауышы ел ыңғайына биш саҡрым ергә ишетелһә, тимәк, ҡонан ат уныҡы булыр..."

Ирекһеҙҙән һорау тыуа: бындай бәйгелә ҡатнашыр өсөн күпме йыр һәм күпме тарих белергә кәрәк!

Әбйәлил районының Яңы Балапан ауылында 1987 йылда һоҡланғыс йыраусы Сәғиҙә Мәғәсүмованың йырҙарын тыңларға насип булғайны. 84 йәштә ине ул, күҙҙәре күрмәй, әммә ҡиәфәтенән, ғөмүмән, бөтә булмышынан яҡтылыҡ бөркөлә, йырынан йылы тулҡындар тарала. "Магнитогорскиҙа наркоз аҫтында операция яһағайнылар, уянып китһәм, әле генә операцияны тамамлағандар. Өҫтәлдә ултырып, иҫәнлегемә шатланып, йырлап ебәрҙем, шаҡ ҡаттылар", - тип һөйләгәйне. Йырлай-йырлай ҙа, 365 йырым бар, тип әйтеп ебәрә. Йыл буйы көн һайын йырлаһам да йырым етерлек, тигән һүҙ бит был...

> Кызганычка каршы, Башкортстан һәм аңа күрше төбәкләрдә яшәүче татарларның тарихы махсус өйрәнелмәгән. Архив материалларында һәм тарихи әдәбиятта ул заманнарда бу территориядә яшәгән татарларның бер өлеше **ясаклы татарлар, казан татарлары, казан кешеләре, казанлылар, уфа (өфе) татарлары, типтәрләр, бобыльләр, мишәрләр, мишәрәкләр, йомышлы татарлар, мещаннар, башкортлар, чын башкортлар, яңа башкортлар** дигән исемнәр белән аталып йөртеләләр.

...Башҡорт халҡының оҙон көйҙәренә, йыраусыларына урыҫ зыялыларынан шулай уҡ И.Георги (1720-1802), П.Кудряшов (1797-1827), В.Даль (1801-1872), И.Березин (1818-1896), Р.Игнатьев (1829-1886), С.Рыбаков (1867-1921) һ.б. күптәр һоҡланған, был турала үҙҙәренең хеҙмәттәрендә яҙып ҡалдырған, бәғзеләре йыр йыйынтыҡтары баҫтырып сығарған. Уларҙың оҙон көйгә һәм йыраусыға ҡарата баһаһын күрһәтер өсөн бер миҫал етәлер: "Башҡорттарҙа шундай көйҙәр күп, уларға теләһә ниндәй композитор көнләшеп ҡарар ине", - тип яҙа күренекле тарихсы-крайҙы өйрәнеүсе, этнограф, фольклорсы, археолог Руф Игнатьев үҙенең "Сказания, сказки и песни, сохранившиеся в рукописях татарской письменности и устных пересказах у иногородцев-магометан Оренбургской губернии" тигән хеҙмәтендә. Заманында Париж консерваторияһында профессор Галеви етәкселегендә белем алған, Рәсәй һәм Көнбайыш Европа музыкаһының иң юғары ҡаҙаныштарында тәрбиәләнгән Руф Игнатьев 1858 йылдан 1865 йылға тиклем йәй мәлдәрендә Троицк өйәҙенең Туңғатар (хәҙерге Учалы районы) ауылында йәшәй, башҡорттар менән тығыҙ аралаша һәм башҡорт йырҙары тураһындағы һүҙен, белгес булараҡ, әлбиттә, тулы яуаплылыҡ менән әйтә. Әйткәндәй, был төбәк әле лә йыраусылары менән дан тота. Миңә, мәҫәлән, Ишкенә Батыршин, Зыяфат Әхмәтшина, Спартак Ильясов кеүек Руф Игнатьев тыңлаған йырҙарҙы һаҡлаған мәшһүр йыраусылар менән "Хазина" тапшырыуҙары әҙерләргә насип булды. Хәҙисә Күсәбаева, Хәнифә Латипова, Мәүзифә Уразова, Хөсәйен Көсөғоловтарҙы күреп өлгөрмәнем, магнитофон таҫмаһына яҙылған йырҙарын тыңлап иҫем китә. Спартак ағай, Аллаға шөкөр, иҫән әле, Хоҙай үҙенә оҙон ғүмер бирһен, минеңсә, ул боронғо йыраусылар бәйгеһенә сыға алыр ине.

...Мәғлүм булыуынса, 1897 йылда музыка белгесе, этнограф Сергей Рыбаковтың "Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта" тигән фундаменталь хеҙмәте донъя күрә. Китапта хәҙерге Учалы, Әбйәлил, Бөрйән һәм Баймаҡ райондарында яҙып алынған ике йөҙҙән ашыу йыр һәм көй тупланған. Төплө белемле (С.-Петербург университетын һәм С.-Петербург консерваторияһын тамамлаған) этнограф һәм музыка белгесе Сергей Рыбаков башҡорт йырҙарының киңлегенә һәм фәлсәфәүи йөкмәткеһенә, импровизаторлыҡ һәләтенә эйә йыраусы, ҡурайсыларҙың күп булыуына һоҡлана, әммә йылдар үткәс кемдер, уның хеҙмәтенә һылтанма яһап, меңәр йыл буйы үҙ ерендә йәшәгән халыҡтың тамырын алыштырып маташыр, тип уйламағандыр ҙа инде. Мәҫәлән, Р.А. Исхаҡова-Вамба тигән автор "Народные песни казанских татар" (Казань. Татарское книжное издательство. 1976, 60-61-се биттәр) тигән хеҙмәтендә шулай тип үҙенсә фараз ҡыла: "К сожалению, гостевые песни в прежней форме почти не сохранились, и отголоски их можно найти то у крещеных татар, (...), то у обашкирившихся казанских татар. Речь идет о песнях 3-й Бурзянской волости Орского уезда, записанных С.Г. Рыбаковым и приводимых им в книге "Музыка и песни уральских мусульман...". Все особенности уклада жизни, говора и т.д., подмеченные С.Г. Рыбаковым у жителей этой волости, говорят о них не как о башкирах в собственном смысле этого слова, а как о татарах, притом городских. Что касается песен, то и они обнаруживают близость не с башкирскими песнями, а с песнями казанских татар. Так, первый куплет песни под №184 обнаруживает полное сходство с текстом, приводимым Н.Ф. Катановым в записи К. Насыри.

**Текст в записи С.Г.Рыбакова:**
Мәсем генә ташы мәүләм таш,
Көмөш кенә йөҙөк мәрйен ҡаш.
Бармаҡкайың ҡамыш, йөҙөң ҡояш,
Аҡылдарың камил, үҙең йәш.

**Текст в записи К.Насыри:**
Тәрәзә төбе асылташ
Алтын белән, жаный, аралаш.
Бармагың камыш, йөзең кояш,
Акылларың камил, үзең яшь.

Ясно, что это варианты одного и того же текста, а приводимые С.Г. Рыбаковым - более ранний, архаичный. В записях С.Г. Рыбакова много арабизмов, которые не были свойственны даже поэтическому языку песен крестьянской традиции у казанских татар, а больше характеризовали творчество горожан. Все это вместе взятое приводит к мысли, что 3-ю Бурзянскую волость населяли потомки татар-горожан, сохранившие их обычаи и песни..."

Шулай итеп, 1894 йылда Серей Рыбаковҡа 3-сө Бөрйән улысы Мәндәғол һәм Кейекбай ауылдары (хәҙерге Бөрйән районы) йыраусылары Мәсемташта йәйләүҙә йырлаған йыр куплетының аҙаҡҡы ике юлының тап килеүенән сығып, Исхаҡова-Вамба бөрйән ырыуы башҡорттарын Ҡаҙан татарҙарына әйләндереп ҡуя. Шаҡ ҡатырғыс: ҡала татарҙарының ейәндәре (Р. Исхаҡова-Вамбаның ҡала ҡыҙы икәненә баҫым яһала - **Ю.Ғ.**) Мәсемташта йәйләүҙә ҡыуыш ҡороп, ҡымыҙ эсеп, ҡурай тартып, оҙон көй йырлап яталар! С.Рыбаков үҙенең сәфәрендә йырҙарҙың нескәлектәрен ишеткән, тойған, иғтибарлы уҡырға ғына кәрәк. С.Рыбаковтың мәндәғолдарҙың, кейекбайҙарҙың холоҡ-фиғелдәрен тасуирлауында ла һис кенә Ҡаҙан татарҙарын шәйләп булмай...

Тағы бер татар авторы, Рәмзиә Шакирова, үҙенең китабында ("Татар халык жырлары", Ҡаҙан: Татар. кит. нәшр., 2014) шул уҡ Роза Исхаҡова-Вамбаның фекерләү ысулын ҡуллана, "Азамат" йырын үҙләштереү аша Ирәндек буйҙарын татар халҡының төйәге итеп ҡуя. Был ханым "Татар халыҡ аштары" (Ҡаҙан: Татар. кит. нәшр., 2013) тигән йыйынтыҡ та сығарған икән. Аш-һыу өлкәһендә, бәлки, белгестер ҙә, әммә башҡорт ирегеттәренең йөрәк ҡаны менән һуғарылған "Азамат" йырын татар халыҡ йырына әйләндереүе хилафлыҡ. Был йыйынтыҡта, йомшаҡ әйткәндә, һорау

**✓ Һаҡмар буйында тәбиғәт ҡосағында Мөхәмәтйән ағайҙың йырлауын тыңлағас, Танимото әфәнде иланы һәм, бөгөн минең иң бәхетле көнөм, тине. Башҡорт оҙон көй йырлағанда, үҙе йырламай, күңеле йырлай.**



билдәһе ҡуя торған урындар тағы бар, береһенә генә туҡталып үтәйек: "Эскадрон" исеме менән килтерелгән йыр. Йырҙың дөрөҫ исеме - "Зәки Вәлиди көйө". 1918-1920 йылдарҙа Башҡорт милли ғәскәре яугирҙарының яратып йырлаған йырҙарының береһе булған был йырҙың һүҙҙәрен Абдулҡадир Инан, көйөн Ғәлимйән Таған яҙған, һәм уны ла татар халыҡ йырына әйләндереү хилафлыҡ.

Тағы бер миҫал. Татарстан ғалимы, филология фәндәре докторы Фәрит Йосоповтың "Сафакүл татарлары: үткәне һәм бүгенгесе" (Казань. 2013) тигән китабындағы ҡайһы бер урындарға ғына туҡталып үтәйек. "Урал төбәктәрендә йәшәүсе татарҙарҙың ҡыҫҡаса тарихы" тигән бүлектә Ф.Йосопов, "ул замандарҙа был территорияла йәшәгән татарҙарҙың бер өлөшө башҡорттар, ысын башҡорттар, яңы башҡорттар тип йөрөтөлә", тип яҙа. Был турала мәшһүр башҡорт тарихсыһы Әнүәр Әсфәндийәров бына нимә ти: "Ҡайһы бер тарихи хеҙмәттәрҙә уларҙың авторҙары аҫаба һәм килмешәктәрҙең асылын боҙоп күрһәтә. Мәҫәлән, килмешәктәр файҙаланған ерҙәрен киңәйтә барып, йәнәһе, аҫаба була алған һәм улар башҡорттарға ҡушыла, уларҙың сафын тултыра барғандар; башҡорт аҫабаһы һәм аҫаба дәрәжәһенә ирешкән килмешәктәр бер үк хоҡуҡтар менән файҙаланған. Ысынында иһә, мишәр аҫаба хоҡуғы алған осраҡта ла башҡорт аҫабалары сафына күсмәгән, үҙ ҡатламында - хәрби мишәрҙәр рәтендә булыуын дауам иткән..." (Ә.Әсфәндийәров. "Олатайҙарҙың бар тарихы". "Китап", Өфө-1996, 209-сы бит). Быға шуны ғына өҫтәү кәрәктер: архив материалдарында, йәғни, халыҡты иҫәпкә алыу документтарында кем кем икәне аныҡ билдәләнә һәм теркәлә, алдашыуға юл ҡуйылмай, был яһаҡ күләме һәм ер мәсьәләләренә бәйле. Мәҫәлән, 1832 йылда сыҡҡан ер тураһында батша законы нигеҙендә аҫаба башҡорттарҙың һәр ир затына 40 дисәтинә ер биреү ҡаралһа, мишәрҙәргә, хәрби ҡатламда тороу сәбәпле - 30, ә типтәрҙәргә һәм татарҙарға 15 дисәтинә ер бүлеү күҙҙә тотолған (күрһәтелгән китап, 180-се бит).

...Һуңғы осорҙа, билдәле булыуынса, ТНВ-ла, айырыуса, интернетта күршеләр ҡурайға "хужа" булып алдылар. Күренекле шәхестәренә арналған телевизион тапшырыуҙарҙа, мәҫәлән, музыкаль фон сифатында ҡурай моңо яңғырай, беҙҙең яҙмаларҙы файҙаланалар, әммә титрҙа һылтанма юҡ. Ф.Йосоповтың китабына "ҡурайлы" йырҙарҙың индерелеүе лә ниндәйҙер дәрәжәлә ҡурайға хужа булырға ынтылыуға хеҙмәт итә. Ҡыҙ илатыу йырҙарынан (390-сы бит):

Атаҡайым өйөндә
Утыра ийем тәҙрә төбөндә.
Йат кешеләрҙең өйөндә
Утырамын ишек төбөндә.
Уй...

Мәғлүм булыуынса, сеңләү жанры үткән быуаттың аҙағында Силәбе, Ҡурған башҡорттарында һаҡланып килә ине, бәлки, әле лә онотмаған кешеләр барҙыр. Ф. Йосоповҡа, башҡорттоң хатта классик оҙон көйҙәрен үҙенең китабына индергән кешегә, сеңләү нимә генә инде ул, "ҡыҙ илатыу йырҙарынан" тип нарыҡлап ҡуйған. Оҙон көйҙәргә килгәндә, был китапҡа ҡарата нимә әйтәһең инде, ҡағыҙҙа нимәгә генә хужа булмаҫҡа мөмкин, ҡағыҙ түҙә: бихисап башҡорт халыҡ йырҙары варианттары менән "Сафакүл татарҙары"ның йырына әйләнгән. Был йырҙарҙың тарихы, ғөмүмән, тарихи ерлеге бөтөнләй иҫәпкә алынмай. Хәйер, Башҡортостан һәм уға күрше төбәктәрҙә йәшәүсе татарҙарҙың бер өлөшө башҡорттар тигән исем менән аталып йөрөтөлә, тип яҙған кешегә башҡорт халыҡ йырҙарының тарихы, әлбиттә, ҡамасаулай ғына. Сөнки беҙҙең оҙон көйҙәребеҙҙең тарихында башҡорт халҡының тарихы сағыла. Автор йырҙары булһа, судҡа бирергә мөмкин булыр ине, ә был осраҡта намыҫ, әҙәп төшөнсәләренә генә таянып була. Китаптың Республика традицион мәҙәниәтте үҫтереү үҙәгенең проекты буйынса сығарылыуы һағайта. Рухи байлыҡтарыбыҙға тағы ҡайһы йүнәлештә ҡурҡыныс янай икән?

...Шундай хәҡиҡәт бар: йыр йырланһа ғына йәшәй. Беҙҙеке, тип кем генә әйтмәһен, мәҫәлән, мин, 40 йылдан ашыу инде оҙон көйҙәребеҙҙе йыйған кеше, "Кәкүккәй"ҙе башҡа милләт кешеһе йырлаған осраҡты белмәйем. Был һүҙем теләгән кеше йырҙы отоп алыу ихтималлығын инҡар итмәй. Татарстан Республикаһының Әлмәт ҡалаһында йәшәүсе татар дуҫым, башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың "Оҙон көй" төбәк-ара бәйгеһенең 1-се дәрәжә лауреаты Инсаф Исламовтың "Азамат"ты йырлауы арҡаһында дуҫтары ейәндәренә Азамат тип исем ҡушып бөттө. Хатта минең дә ейәнем тыуғас, Инсаф Исламов Азамат исеме тураһында иҫкә төшөрҙө - ҡыуанып ҡуштыҡ. "Азамат"ты ҡайҙа ғына йырламаһын, бер ҡасан да, татар халыҡ йыры, тип иғлан иттереү Инсаф ағайҙың башына ла килмәйәсәк. Азамат башҡортта ысын ир-егет тигән мәғәнәгә эйә, был йөкмәтке йырға һалынған, һәм уны Инсаф ағай һымаҡ ысын ир-егеттәр ярата йырлай...

...Әхнәф Харисовтың "Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы" китабының 12-се битендә Исмәғил Рәмиевтың Туҡай тураһында иҫтәлегенән өҙөк килтерелә: "Шағирҙы күреп белеүем 1911-1913 йылдарға тура килә.

- Башҡорт балаһы, - ти торған ине ул миңә, гәрсә Уфа яғы Урал буйы типтәре булһам да, - "Ашҡаҙар"ҙы йырла әле.

Шағир үҙе лә йырға ҡушыла..."

Шунда уҡ уҡыйбыҙ: "...Туҡай "ысын башҡорт рухы вә башҡорт моңо менән йырланған йырҙар"ҙы тыңларға ятраҡан... Өфөгә килгән сағында, мәҫәлән, Фаиз Дауытов йырлаған башҡорт халыҡ йырҙарынан Туҡай шул тиклем тәьҫирләнә, хатта "мин ундай йырсыны бөтә ғүмеремә тыңлар инем", ти. Һәм шунда уҡ: "Әгәр Фаиз әфәнде кеүек ысын башҡорт рухы вә башҡорт моңо менән йырланған йырҙар ҙа граммофондарға алынып ҡалһа, бының аҙмы әһәмиәте булыр ине!..." - тип, был хазинаға бер кемдең дә иғтибар бирмәүе өсөн ҡайғыра".

Тәржемәсеһеҙ аралашҡан күрше халыҡтың күңеленә ятҡан, тойғоларыңа тап килгән йырын, йыр беҙҙеке, тип дәғүә белдермәйенсә лә йырлап була бит. Туҡай кеүек!

...Өйөндәге хәлде күршеңдән бел, тигән һүҙ бар. 1990 йылда Японияла Эсаши ҡалаһында үткәрелгән "Ойвакэ" Халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашырға насип булды. Ойвакэ - япондарҙың оҙон көйө, "йөк артмаҡланған атты ҡыуыусының йыры" тип тәржемә ителә. Япондар Бөйөк ебәк юлында урынлашҡан халыҡтарҙың моңонда уртаҡлыҡ оҙон көйҙәрендә сағыла, тип һанап, быға үҙҙәренең йырсылары ғына ҡатнашып килгән фестиваль-конкурсҡа был юлы Кореянан, Монголиянан, Ҡаҙағстандан, Башҡортостандан һәм Венгриянан халыҡ йырсыларын, музыканттарын саҡырған ине. Фестивалдә ойоштороу комитеты ағзаһы, ул саҡта Хоккайдо университетының ректоры, аҙаҡ Айны халыҡтарының мәҙәниәтен һаҡлау үҙәге директоры, исеме бөтә донъяға билдәле этномузыка белгесе, профессор Кадзуюки Танимото менән танышыу бәхете эләкте. Ни өсөн, бәхет, тием, Танимото әфәнде миңә, бәләкәйҙән оҙон көйҙәребеҙҙе тыңлап, уларға мөкиббән булып үҫкән кешегә, оҙон көй һабағы бирҙе. Беҙ уның менән 2009 йылда уның вафатынаса тығыҙ аралашып йәшәнек. Уның арҡаһында 2000 йылда Башҡортостандан "Урал хазиналары" фольклор төркөмө Японияла Осака ҡалаһында үткәрелгән "ВАШШОИ-2000" Бөтә Донъя фольклор фестивалендә ҡатнашты, 2003 йылда башҡорт моңо Японияла Саппоро ҡалаһында үткәрелгән "Евразия йыры" Халыҡ-ара музыка фестивалендә яңғыраны. Танимото әфәнде үҙе лә башҡорттоң оҙон көйҙәрен тыңлау, яҙып алыу маҡсаты менән 1998, 2000, 2004 йылдарҙа Башҡортостанға килеп ҡайтты. Тәүге килгәнендә мин уны Хәйбулла районына Һаҡмар Бүреһе ауылына һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевҡа алып барҙым. Әйткәндәй, Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев боронғо йыраусылар бәйгеләрендә ҡатнаша алырҙай мәшһүр йыраусы ине. Һаҡмар буйында тәбиғәт ҡосағында Мөхәмәтйән ағайҙың йырлауын тыңлағас, Танимото әфәнде иланы һәм, бөгөн минең иң бәхетле көнөм, тине. "Оҙон көй - ул Евразия халыҡтары традицион музыкаһының иң бөйөк ҡаҙанышы, - рәсми сығыштарында ла, былай һөйләшкәндә лә шулай тип ҡабатларға ярата ине Танимото әфәнде. - Һәм был мөғжизәнең эпицентры тап башҡорт халҡында. Шуға иғтибар иттем: башҡорт оҙон көй йырлағанда, үҙе йырламай, күңеле йырлай. Һәр башҡорт оҙон көйҙө башҡарһа, тарихы юғалмаясаҡ, киләсәге лә буласаҡ".

Оҙон көй һәм йыраусы тураһында әйтелгән был һүҙҙәргә аңлатма артыҡ.

**Юлай ҒӘЙНЕТДИНОВ.**

✓ *Башҡорт милли байрамы һабантуйҙың тәүмаҡсатын кире ҡайтарырға һәм халҡыбыҙ традицияларына нигеҙләнеп үткәрергә кәрәк. Башҡортостан Башлығының һабантуйҙар айыҡ булырға тейеш, тигән тәҡдимен хуплайбыҙ.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОМАРТҺЫҢМЫ? Гендарың ғәйепле

■ Бөйөк Британияла үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, был илдә йәшәүсе һәр дүртенсе ҡатын-ҡыҙ интернет ярҙамында үҙенә диагноз ҡуя һәм үҙаллы дауалана икән. Яңылыш диагноз ҡуйыу һөҙөмтәһендә улар файҙаһы теймәгән дарыуҙар һатып ала, йыш ҡына был дарыуҙар кире һөҙөмтәгә килтерә. Ғалимдар әйтеүенсә, зыян күргәндән һуң гүзәл заттарҙы ауырыуҙан ғына түгел, үҙаллы дауаланыу эҙемтәләренән дә дауаларға тура килә. Һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, һәр унынсы ҡатын-ҡыҙ үҙенең сәләмәтлегенә ҡағылышлы проблемаларын ғаилә ағзалары менән бүлешмәй. Ә һәр егерменсе ҡатын-ҡыҙ: "Ауырыу үҙе үтер әле", - тип, медицина ярҙамына йылдан ашыу мөрәжәғәт итмәй йөрөй. Британия ҡатын-ҡыҙҙары үҙаллы дауаларға маташҡан иң йыш осраған билдәләргә йоҡо боҙолоуы, баш ауыртыуы, депрессия, мускулдар ауыртыуы, арыу инә.

■ Күптәр "ҡоро күҙ" синдромы менән яфалана. Был сир ваҡытында күҙҙәр әсетә, яҡтыға ҡарап булмай, тиҙ арый. Токио университетының медицина мәктәбе тикшеренеүселәре уны ҡәһүә ярҙамында дауаларға тәҡдим итә. Билдәле булыуынса, кофеин төкөрөк һәм ашҡаҙан һуттары бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, ул шулай уҡ күҙ йәше биҙе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Был мәғлүмәтте Япония ғалимдары 78 оло кешелә тикшереп ҡараған. Уларҙың береһе лә "ҡоро күҙ" синдромы, глаукома һәм башҡа күҙ ауырыуҙары менән ауырымаған. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, кофеин был ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Глазго университеты ғалимдары популяр эсемлектәргә анализ үткәргән. Асыҡланыуынса, уларҙың күбеһендә шәкәр күләме норманан юғарыраҡ. 2005 кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, күптәр татлы газлы эсемлектәрҙә шәкәр күплеген белһә лә, һөт һәм башҡа коктейлдәрҙә, энергетик эсемлектәрҙә һәм емеш-еләк һуттарында шәкәрҙең шулай уҡ юғары күләмдә булыуын бөтөнләй белмәй. Мәҫәлән, барыһы ла файҙалы тип иҫәпләгән анар (гранат) һутында шоколадлы һөт коктейленә йәки емеш-еләк һутына ҡарағанда шәкәр 1,5 тапҡырға артығыраҡ. Һуңғы осорҙа һимереү сиренең артыуы тап шәкәрле эсемлектәр ҡулланыу менән бәйле, ти ғалимдар. Был ҡан баҫымының күтәрелеүенә, шәкәр диабетына, йөрәк сирҙәренә, инсультҡа килтерә.

■ Буффало һәм Калифорния университеттары тикшеренеүселәре иҫәпләүенсә, ҡайһы бер кешеләрҙең башҡаларға ҡарағанда йомартыраҡ һәм игелеклерәк булыуында уларҙың гендары "ғәйепле". Ғалимдар ике гормон: "бәхет гормоны" - окситоцин һәм агрессияны яйлаусы вазопрессин кимәлен тикшереп ҡараған. Кемдә был ике гормон юғарыраҡ, улар ҡағиҙә булараҡ, бик йомарт һәм киң күңелле була. Шулай итеп, агрессияны, һаранлыҡты, тиҙ ҡыҙып барыусанлыҡты кешенең ДНК үҙенсәлегенә һылтарға мөмкин, ти ғалимдар.

■ Ҡала ығы-зығыһы, юлдарҙағы тығындар, йәмәғәт транспортындағы халыҡ, эштәге стресс һәр кемдең нервыларын ҡаҡшатыу һәләтенә эйә. Әгәр ҙә эшкә һәләтегеҙ кәмеһә, йоҡлай алмаһағыҙ, күңелегеҙҙе хәүеф тойғоһо биләп алһа, спорт менән шөғөлләнә башлағыҙ, тип кәңәш итә табиптар. Шулай уҡ башҡа төрлө физик әүҙемлек тә шатлыҡ һәм бәхет гормондары - эндорфиндарҙың кимәле күтәрелеүгә килтерә. Бынан һуң шунда уҡ кәйефегеҙ күтәреләсәк, насар уйҙар шунда уҡ таралаҫаҡ.

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# АСЫЛЫНДА БУЛ!

**Һуңғы осорҙа һабантуй үҙенең милли колоритын, үҙенсәлеген юғалта һәм ниндәйҙер формаль сараға әйләнә башланы. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эксперттар менән берлектә методик күрһәтмәләр эшләне. Ҡоролтай Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова фекеренсә, был күрһәтмәләрҙең маҡсаты - элекке һабантуйҙарҙы, уның миллилеген ҡайтарыу, унда халыҡты күберәк йәлеп итеү.**



- Башҡорт милли байрамы Һабантуйҙың тәүмаҡсатын кире ҡайтарырға һәм халҡыбыҙ традицияларына нигеҙләнеп үткәрергә кәрәк. Яңы концепцияны районлар әҙер булғас индерергә тәҡдим итәбеҙ. Был шешлек ҡурып, эсеп байрам итер сара түгел. Башҡортостан Башлығының һабантуйҙар айыҡ булырға тейеш, тигән тәҡдимен хуплайбыҙ. Ысынлап та, уны рух, берҙәмлек байрамына әйләндереү мөһим. Шешлек урынына милли эсемлектәр һәм ризыҡтар булған тирмәләр урын алырға тейеш, - тине Эльвира Айытҡолова.

Методик күрһәтмәлә ырыу элементтары булған стилләштерелгән айырым тирмәләр ҡороу, көрәш кеүек спорттың милли төрҙәренән тыш, тағы ауҙарыш, ылаҡ һәм башҡаларҙы индереү тәҡдим ителә.

- Төрлө йәштәге балалар өсөн милли уйын майҙансыҡтары хаҡында ла уйларға тейешбеҙ. Шулай уҡ шәжәрә өлгөләре буйынса айырым майҙан булыуы мөһим, сөнки һәр районда тыуған яҡты өйрәнеүселәр бар. Һәм, әлбиттә, "Атайсал" тип аталған күргәҙмә һабантуйҙарҙың мотлаҡ элементы булырға тейеш. Республика Башлығы инициативаһы буйынса бөгөн яҡташтар үҙенең кесе Ватанына ярҙам итеү проекты эшләй ҙә инде. Күргәҙмәлә

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ЫСЫН БАШҠОРТ БАЙРАМЫ УЛ!



Донъяла байрамһыҙ халыҡтар булмай. Сәнғәте, фәне иң юғары бейеклектәргә күтәрелгән, йыһан киңлектәрен гиҙгән милләттәр ҙә, джунгли кеүек урман шырлыҡтарында берәү менән ҡатнашмай, үҙ донъяларында мәж килгән бәләкәй генә ҡәбиләләр ҙә, ниндәй ҙә булһа ваҡиғаға арнап, байрамдар үткәрә. Күренекле урыҫ ғалимы М.Бахтин байрамдарҙы, мәҙәниәттең иң тәүге төрө, ти. Ҡайһы бер ғалимдар, кешелек таш быуат замандарында уҡ байрамдар үткәргән, тигән фекерҙә. Йәғни, кешелек мәҙәниәте формалаша башлаған саҡтарҙа байрамдар ҙа формалаша башлаған, тиергә була. Борон-борондан байрамдарҙы ниндәй ҙә булһа берәй ваҡиғаға бәйләп, уларға арнап үткәрер булғандар. Был ваҡиғаларға ҡышҡы һыуыҡтар (селлә) бөтөп, йылы көндәр килеүе, сәсеүгә төшөү йәки сәсеү эштәренең тамамланыуы, көҙөн уңыш йыйып алыу, ҡышҡы һуғымдар башланыу кеүек ваҡиғаларҙы индерергә була.

Башҡорттар ҙа бик борондан үҙҙәренең тормош-көнкүрешенә, тәбиғәтенә яраҡлаштырылған байрамдар үткәрер булған. Бындай байрамдарға - ҡарғатуй (ҡарға бутҡаһы), кәкүк сәйе, наурыз, нардуған, һуғым кеүектәрҙе индерергә була. Ошондай эреле-ваҡлы байрамдарыбыҙ araһында иң көтөп алынғаны, төрлө мауыҡтырғыс тамашаларының күплеге, бай йөкмәткеһе менән айырылып торған байрам - ул һабантуйҙыр. Хәҙерге ваҡытта һабантуй башҡорттоң ғына милли байрамы булыу сиктәренән сығып, Башҡортостан Республикаһында йәшәгән бөтә халыҡтарҙың да уртаҡ һәм яратҡан бер байрамына әүерелде. Быға тик ҡыуанырға ғына ҡала.

Башҡорт һабантуйы тураһында фәндә иң тәүге мәғлүмәттәрҙе 18-се быуаттың урыҫ ғалимдары Георги, Лепехиндың хеҙмәттәренән табырға була. Мәҫәлән, Георги башҡорт һабантуйының эстәлеген тасуирлап яҙғандан һуң, сирмештәрҙә лә (хәҙерге мари халҡында - **З.Ә.**) һабантуйға оҡшаш байрам барлығын билдәләп киткән. Георгиҙың яҙмаларынан күренеүенсә, шул заман һабантуйының тамашалары һәм эстәлеге хәҙерге заман һабантуйы менән, дөйөм алғанда, тап килә, тип әйтергә була. Һабантуй, ғөмүмән, күп кенә төрки халыҡтарында бар. Мәҫәлән, башҡорт менән татарҙан тыш, нуғайҙар, ҡумыҡтар, ҡарасай-балҡарҙар ҙа уны байрам итә. Эстәлеге лә, ҡайһы бер айырымлыҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, яҡынса тап килә, тип әйтергә була. Һабантуйҙы Себерҙә йәшәгән төрлө эреле-ваҡлы төрки телле халыҡтарҙың милли байрамдары менән сағыштырып тикшереү был милли байрамыбыҙҙың тамыры бик боронғо дәүерҙәрҙә һәм дөйөм бер тамырҙан икәнлеген күрһәтә. Мәҫәлән, яҡуттарҙа - ысыах, хакастарҙа -тон пайрам, тываларҙа -шагаа, алтайҙарҙа сага-байрам кеүектәр шундай уртаҡ тамырлы байрамдарҙандыр. Тарихтың тағын да тәрәнерәк осорҙарына күҙ һалһаҡ, боронғо һунндарҙың да беҙҙең һабантуй кеүегерәк байрам үткәреүе тураһында Ҡытай яҙмаларында мәғлүмәттәр һаҡланған. Унан алдараҡ дәүерҙәрҙә шундай уҡ байрамды скифтарҙың, сактарҙың үткәреүе тураһында боронғо гректар яҙып ҡалдырған. Көнсығыш иран телдәренең береһендә һөйләшкән сактарҙың сарматтар, аландар кеүек үк, башҡортто формалаштырыуҙа ҡатнашыуы фәндә иҫбат ителгән бер факт булып, хәҙер быға берәү ҙә шик белдермәй. Тимәк, милли байрамыбыҙ - һабантуйҙы ата-бабаларыбыҙ беҙҙең дәүерҙәргә тиклем үк үткәргән һәм уның йәше бер нисә мең йыл иҫәпләнә, тип әйтә алабыҙ.

Был байрам Ислам диненә ҡәҙәр үк, донъяла мифологик аң хөкөм һөргән дәүерҙә формалашҡанға күрә, уның эстәлеген дә башҡорт мифологияһынан сығып аңлатырға кәрәк. Шунһыҙ, беҙ һабантуйҙың эстәлеген тулыһынса аңлауға өлгәшә алмаҫбыҙ. Мине һабантуйҙың эстәлеге күптән, студент йылдарынан уҡ ҡыҙыҡһындыра ине. Ошо ҡыҙыҡһыныуым эҙләнергә, соҡсонорға мәжбүр итеп торҙо һәм, ниһайәт, байрамдың семантикаһын аса алдым кеүек. Шуларҙы уҡыусыға тәҡдим итергә булдым.

Хәҙерге һабантуйҙар яҙғы сәсеү эштәре үткәс, ошо эштәргә йомғаҡ яһау кеүегерәк үткәрелә. Элек иһә, башҡорттар һабантуйҙы ҡар иреп, тау биттәрендә йәшел үлән ҡалҡып, ағастарҙа бөрөләр тулыша башлағас үткәрер булған. Был байрам башҡорттоң боронғо календарь байрамы булараҡ, тәбиғәттең терелеүен, тормоштоң яңырыуын һынландырған тамашаларҙан торған. Яҙ көндәре, тәбиғәт ҡышҡы йоҡонан уянып, донъя һәм кеше тормошо яңырған саҡта, донъялағы күп халыҡтар һабантуйҙы байрам иткән һәм уны әле лә байрам итәләр.

Һабантуйҙағы тамашаларҙан - ат сабышы (бәйге), йүгереү, көрәш, бейек текә бағана башына (һырғауылға) үрмәләү, көршәк ватыу, бер яҡ башы ергә ҡыялатып ҡаҙып ултыртылған, икенсе башына аҡ тәкә бәйләнгән сайҡалып торған бүрәнә аша үтеп, шул тәкә-бүләкте алыу, ике аяҡты ла тоҡҡа тығып, бер-береһен уҙа-уҙа йүгерергә маташыу кеүек тамашалар башҡорт һабантуйының мотлаҡ үткәрелергә тейешле ритуалдары. Борон замандарҙа был тамашаларҙың һәр береһенең башҡорт өсөн эстәлеге, мәғәнәһе (семантикаһы) аңлайышлы булған. Уларҙың тейешле итеп, тулы үтәлеше башҡорт донъяһының именлегенә йоғонто яһай, шуны тәьмин итә, тип ышанған боронғолар. Сөнки боронғо башҡорттоң уйлауынса, шулай уҡ башҡорттоң мифологик, этнографик, фольклор материалдарынан күренеүенсә, һабантуйҙа үткәрелгән тамашаларҙы донъя (Йыһан) яралған саҡта уларҙың иң боронғо ата-бабаһы Урал батыр башҡарған. Урал батыр өсөн улар тамаша ғына түгел, ә бөтә донъяны хаостан (дейеү, аждаһаларҙан) азат итеп, донъяны әҙәм балаһы һәм бүтән тере йәндәр имен-аман йәшәрлек хәлгә килтереү кеүек кеше атҡарып сыға алмаҫлыҡ ауыр эш булған. Йәғни, хәҙерге заман театр теле менән

✓ ***Һабантуйҙа йола буйынса үтәлгән һәр тамашаның бик тә тәрән йөкмәткеһе бар. Был боронғо байрамыбыҙҙың төп мәғәнәһе - донъялар имен, тәртиптә һәм ипле торһон тигән теләктәр.***



тормошҡа ашырылған һәм планлаштырылған проекттарҙы күрһәтергә мөмкин. Йәғни, беҙ һабан байрамын йөкмәткеһе яғынан тулыһынса үҙгәртергә тәҡдим итәбеҙ. Быйыл, әлбиттә, быны бөтә районларҙа ла индереп булмай, шулай ҙа ҡайһы бер төбәктәрҙә күрһәтмә һабантуй ойоштороп ҡарау кәрәк. Икенсе йыл инде ошо тәжрибәнән сығып, башҡорт халыҡ байрамы һабантуйҙың төп нөсхәһен ҡайтарыу мөһим. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эксперттары ошондай байрам ойошторорға әҙер булғандарға консультация бирәсәк, - тип тә өҫтәне Эльвира Ринат ҡыҙы.

***Әйткәндәй, Мәләүез ҡалаһынан Әмир ХӘЛИТОВ та ошо турала үҙ фекерҙәрен белдерә:*** Һабан байрамы халҡыбыҙҙың милли асылын күрһәткән ваҡиға ул. Әммә башҡорттарҙың ғына түгел, ә республикала йәшәгән башҡа халыҡтарҙың да иң яратҡан байрамына әйләнгән һабантуй, ысынлап та, һуңғы егерме йыл эсендә бер ҡалыпҡа һалып уҙғарыла башланы. Быға власта ултырған чиновниктар әллә ни иғтибар итмәй, сөнки уларҙан сара ниндәй йөкмәткеле булыуын түгел, ә тауыш-ғауғаһыҙ үтеүен талап итәләр.

Мин элек ауыл һайын үткәрелгән һабантуйҙарҙы хәтерләйем һәм уларҙа бер ниндәй ҙә яһалмалыҡ булмағанын раҫлай алам. Яңы Рәсәй тарихында байрамдар, күреүегеҙсә, район үҙәктәрендә генә уҙғарыла башланы.

Байтаҡ йылдар мин замана һабантуйының мөһим өлөшөн тәшкил иткән тирмәләр конкурсы комиссияһында эшләнем. Шул тәжрибәм тураһында һөйләйем әле. Бындай конкурстарға бик үк ғәҙел булмаған баһалауҙар хас икәнен ишетә белә инем. Шуны үҙ күҙҙәрем менән күрергә тура килде. Мәҫәлән, гел генә призлы урындар алып килгән хужалыҡтың үҙ тирмәһен илке-һалҡы ғына әҙерләгәнен күреп, мин уны конкурста ҡатнаштырмаҫҡа, башҡа тирмәләрҙе баһаларға тәҡдим иттем. Шул саҡ комиссияның бер ағзаһы (мәғариф бүлеге вәкиле): "Уларға мотлаҡ урын тейеш, сөнки улар беҙҙе ит менән тәьмин итә бит!" - тип ҡаршы сыҡты. Мин үҙ һүҙемдә ҡаты торҙом. Киләһе йылына әлеге хужалыҡ быңа тигән тирмә ҡорҙо...

Минең ныҡышмал, ғәҙел икәнде күргәс, өсөнсө йылына комиссия рәйесе итеп һайлап ҡуйҙылар. Бына шунда күрҙем дә инде һабантуй бәйгеләрендәге ғәҙелһеҙлектәрҙе. Баҡһаң, бөтә төр ярыштарҙа ла урындар алдан билдәләнеп ҡуйыла икән. Бер хужалыҡтың тирмәһе тыштан милли орнамент төшөрөлгән клеенка менән ябылған, эстә өҫтәл, ә унда шарап һәм башҡа эсемлектәр... Урын бирелмәҫкә тейеш тирмә тәбиғи кейеҙ менән ябылған, эстә башҡорт йорттарына хас йыһаз (әйткәндәй, ул хужалыҡта башҡорт ауылдары юҡ). Ныҡышып, быларға беренсе урынды биреүгә өлгәштем.

Һабантуйҙың икенсе көнөнә хакимиәткә саҡыртып, ни өсөн ялтыр тышлы тирмә беренсе урын алмағанын аңлатыуымды һоранылар. Аҙаҡ миңә комиссияла һуңғы тапҡыр ҡатнашҡанымды иҫкәрттеләр. Хакимиәт башлығы алмашынғас, артабан да был комиссияны етәкләнем һәм һәр ваҡыт ғәҙеллеккә өлгәштем. Шуға күрә, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының һабантуйҙарҙы халҡыбыҙ йолаларына нигеҙләнеп үткәреү, уның төп нөсхәһен, миллилеген ҡайтарыу хаҡындағы тәҡдимен хуплайым. Һабан байрамының аныҡ положениеһы булырға тейеш тип иҫәпләйем...

әйткәндә, Урал батыр эпосы сценарий булһа, һабантуй иһә ошо сценарийға ҡоролған тамаша була. Бының шулай икәненә башҡорт халыҡ ижадынан әллә күпме миҫалдар килтерергә була.

Боронғо замандарҙа һабантуйҙағы ике батырҙың көрәшен аҡ, саф, изге көстәрҙең яуыз ҡара көстәргә ҡаршы көрәше тип аңлағандар. Урал батыр эпосында Урал Ҡатил батша иленә барып сыҡҡас, был илдә үгеҙ менән көрәшеп, уны еңә һәм бөтә ҡара, яуыз көстәрҙе юҡ итә. Батырҙарҙың үгеҙ менән көрәше тураһында башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә телгә алына. Үгеҙ менән көрәш, ғөмүмән, төрки халыҡтарҙың бик борондан килгән йолаһы булған. Был турала ғалимдар күптән инде әллә күпме хеҙмәттәр яҙып сыҡты. Әлеге үгеҙ менән көрәш йолаһында үгеҙ ҡышты һынландырған, сөнки ул боронғо ата-бабаларыбыҙҙың мифологик ҡараштары буйынса, ҡыштың, теге донъяның символы булған. Шуға күрә, Урал батырҙың үгеҙ менән көрәшен һәм был көрәштә еңеүен яҙҙың ҡышты еңеүе тип аңларға кәрәк.

Борон шулай уҡ һабантуйҙа тоҡ кейеп йүгереү ярышының да үҙ мәғәнәһе булған. Хәҙер был бер ҡыҙыҡ һәм дә мәҙәк тамаша булараҡ ҡабул ителә. Башҡорт этнографияһында ярымтыҡ, шүрәле тигән әҙәм балаһына зыян килтерергә маташыусы мифологик заттар тураһында бихисап легендалар, риүәйәттәр һаҡланған. Боронғо башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, ана шул ярымтыҡ тигәненең күҙе лә, аяғы ла тик берәр генә, йәғни һыңар булған. Улар төндә атта йөрөргә яратҡандар, тип тә әйтелә фольклорҙа. Зәғифлек, боронғоларҙың уйлауынса, теге донъя менән бәйләнеште аңлатыусы бер символ. Теге донъя иһә, мифологик ҡараштар буйынса, ҡыш менән дә бәйле. Башҡорт ҡобайырҙарында "Ҡара ерҙең үлгәне - ҡар аҫтында ҡалғаны", тигән юлдарҙан ҡарҙың, ҡыштың үлем менән бәйле булыуын күрәбеҙ. Фәнни мәғлүмәттәрҙән ҡыш менән үлемдең борон синоним булараҡ йөрөүен беҙ бер башҡортта ғына түгел, һинд-иран телле һәм бүтән телле халыҡтарҙа ла күрәбеҙ.

Башҡорттарҙың боронғо инаныуҙары буйынса, теге донъяла ожмахҡа юлда сират күпере аша үтергә кәрәк. Был күпер аша үҙ ғүмерҙәрендә тик яҡшылыҡ, изгелек ҡылған кешеләрҙе аҡ тәкә үткәреп ебәрә, имеш. Беҙҙә әле лә, бик ныҡ өлкәнәйеп, йәшәргә күп ҡалмаған кеше тураһында кинәйәләп "Аяғына аҡ тәкә бәйләнгән ине", тигәнде ишетергә була. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, теге донъяла сират күпере аша үтергә күп ҡалмаған, тип аңларға кәрәк. Һабантуйҙа ҡыялатып ергә ҡаҙып ултыртылған, сайҡалып торған бағана аша үтеп, осона бәйләнгән тәкәне призға алыуҙы ана шул сират күпере аша уҙып, ожмахҡа еләгеүҙең символик бер һынландырылышы, тиеберәк аңларға була. Теге донъяла ниндәйҙер бер күпер аша үтеү тураһындағы инаныстар бик күп халыҡтарҙа бар.

Һабантуйҙың тағын бер мәҙәге - күҙҙәрҙе бәйләп көршәк ватырға маташыуҙы ла башҡорт мифологияһынан аңлатырға була. Этнографтарҙың материалдарынан күренеүенсә, яңы ваҡыт башланған мәлдә иҫке әйберҙәрҙән ҡотолоу, уларҙы ватыу, онтау йолаһы бик күп халыҡтарҙа бар. Күп кенә халыҡтарҙа, мәҫәлән, Европа халыҡтарында, шулай уҡ Урта Азияла йәшәгән тажик, үзбәктәрҙә яңы йыл башланыуҙы аңлатҡан Наурыз байрамында был йола байрам шаярыуы булараҡ әле булһа үтәлеп килә. Был йоланың мәғәнәһе - иҫкене ватып, яңыға юл ярыу, сөнки, иҫке китмәй тороп, яңыға юл бикле. Башҡортта әле лә "Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй" тигән әйтем йәшәп килә. Бының мәғәнәһе - кемдер берәү үлеп, теге донъяға күсеп, урын бушатмай тороп, яңы тыуырға тейеш икенсе берәүгә урын юҡтыр.

Боронғо төркиҙәрҙең, шул иҫәптән, башҡорттарҙың мифологик ҡараштары буйынса, Тәңре йәшен уғы менән атып, табаҡтай күкте яра һәм шунан ғына йомортҡа ярылып, яңы йән эйәһе донъяға тыуған кеүек, донъя ярала. Был мотив башҡорт фольклорында бик яҡшы һаҡланған. Мәҫәлән, Буҙансы батыр, Ҡараса батыр, Етегән батыр әкиәттәрендә һәм башҡаларҙа Йүгерек батыр йүгереү ярышында йоҡлап китә һәм уны уятыу өсөн батырҙың дуҫы уҡ менән Йүгеректең башына кейҙерелгән сүлмәкте (ҡаҙанды) яра ата. Шунан һуң Йүгерек батыр уяна һәм хәҙерге тел менән әйткәндә, финишҡа беренсе булып килеп етә. Бында уҡ атыу шул уҡ йәшен уҡтың символы булһа, ә йоҡлап уяныуҙы үлеп һәм яңынан терелеү, яңынан йәшәй башлау, тип аңларға кәрәк. Ошоларҙан сығып, һабантуйҙағы көршәк ватыуҙы ла Тәңренең донъяны барлыҡҡа килтергән мәлдә уҡтан атып, өр-яңы донъяны барлыҡҡа килтереүенең символик һынланышы, тип аңларға була.

Һабантуйҙа бейек бағана (һырғауыл, һырғый тип тә әйтәләр - **З.Ә.**) башына менеп бүләк алып төшөүгә лә башҡорт мифологияһынан аңлатыу табырға була. Боронғо ата-бабаларыбыҙҙың донъяуи ҡараштары буйынса, донъяның үҙәгендә Донъя тирәге (Донъя ағасы) үҫә, имеш. Был ағас яҡты донъяны аҫҡы һәм юғарылағы (күк) донъяларға тоташтырып тора. Ағастың тамыры - аҫҡы донъя, ә башы юғарылағы күк донъяһы менән тоташтырып тора. Был ағастың тамырына бик ҙур бер йылан оялаған, ә иң үрге осонда Сәмреғош оя ҡорған. Хәтерегеҙҙәлер, Аҡъял батыр әкиәтендә батыр егет Сәмреғоштың балаларын баяғы йыландан ҡотҡарғас, Сәмреғош батырҙы аҫҡы донъянан яҡты донъяға алып сыға. Һабантуйҙағы бейек, шыма һырғауыл ана шул донъя үҙәгендә үҫеүсе Донъя ағасының символылыр. Борон был бейек бағанаға (һырғауылға, һырғыйға) менеүҙе күккә олғашып, унда Тәңренең үҙе менән күрешеп, унан бүләк алып төшөүгә тиңләгәндәр. Бындайыраҡ йолалар донъялағы күп кенә халыҡтарҙың мифологик ҡараштарында булған һәм әле лә күптәрендә һаҡлана.

Һабантуйҙа йола буйынса үтәлгән һәр тамашаның бик тә тәрән йөкмәткеһе бар һәм улар боронғо замандарҙа ниндәй ҙә булһа мәғәнә менән башҡарылған. Был боронғо байрамыбыҙҙың төп мәғәнәһе - донъялар имен, тәртиптә һәм ипле торһон тигән теләктәр. Тик ваҡыт үтеү менән уларҙың мәғәнәләре онотолоп бөткән, башҡорттар ислам диненә күсеп, һабантуйҙың төп мифологик нигеҙҙәрен һәм уны үткәреүҙең сәбәптәрен дә иҫтән сығарып, был байрамды матур һәм мауыҡтырғыс бер тамаша, тип кенә ҡарай башлаған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт фольклоры һәм этнографияһы материалдарынан сығып, һабантуйҙы халҡыбыҙҙың иң борондан килгән төп бер байрамы тип әйтә алабыҙ. Был байрамды боронғо ваҡыттарҙа башҡорттоң ата-бабалары булған сак, сармат, аландар, һунндар ҙа үткәрер булған. Тимәк, беҙ, башҡорттар, әле һанап киткән халыҡтарҙың туранан-тура вариҫтары булараҡ, был байрамды үҙ байрамыбыҙ тип байрам итәбеҙ.**

**Зәкирйән ӘМИНЕВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Башҡаларға ярҙам итеп, нисек үҙеңә ярҙам итергә?

Кешегә әйткән һүҙегеҙ ҡабат үҙегеҙгә әйләнеп ҡайтып, елкәгеҙгә "менеп ултыраса҃к". Күрәһең, мең йыл элек, И-Цзин ваҡытында, быны һиҙемләү (интуиция) кимәлендә аңлағандарҙыр, әммә быға бөгөн беҙҙең фәнни аңлатмабыҙ бар. Барыһы ла ябай энергия алышыныуға нигеҙләнә. Беҙҙән сыҡҡан бар нәмә кире үҙебеҙгә ҡайта. Әгәр һүҙҙәребеҙ һәм эшебеҙ тик негативтан ғына тора икән, Ҙур тормош беҙгә шуны уҡ кире ҡайтара.

...Йәшлек йылдарында Филипп үҙен әллә кем итеп тоя. Шулай булыр ҙа ине, был турала уның үҙенән башҡа берәү ҙә белмәй. Өмөтһеҙлеккә бирелеп, ул барыһына ла үҙенең ни тиклем һәйбәт, ә башҡаларҙың насар булыуын һөйләй башлай. Әммә бынан бер ниндәй яҡшы һөҙөмтә сыҡмай. Филиптың кире образы ныҡлап тамырлана ғына бара. Бер ваҡыт ул атаһының уны күршеһенә маҡтап торғанын ишетә. Шунан һуң күршеһе егетте эшкә ала. Был Филипҡа өмөтһеҙлектән арынырға, үҙ ҡылығына икенсе күҙлектән ҡарарға ярҙам итә. Ул башҡаларҙы кәмһетмәй, киреһенсә, уларға ярҙамлашып, ҡылығын үҙгәртергә һәм шәхси үҫешенә булышлыҡ итергә ҡарар итә. Ниндәйҙер бер мәлдә ул башҡаларҙың үҙен бик юғары баһалауын аңлай. Хәҙер ул - ихтирамлы ғалим.

Ғаләмдә, бигерәк тә Ер тип аталған беҙҙең донъяла барлыҡ йән эйәләренә тере ҡалыу ғына түгел, ә йәшәүҙең тағы ла юғарыраҡ баҫҡысына күсергә ярҙам итеүсе көс йәшәй. Уны, ғәҙәттә, Аллаһ тип атайҙар, ә беҙ уны "Ижадсы. Булдырыусы" тип тә атайыҡ. Сөнки Аллаһ һүҙе йыш ҡулланыла һәм уның әһәмиәтен аңламайсараҡ ҡабатларға өйрәнде кеше.

Ижадсы беҙгә йәшәүҙең иң юғары формаһына күсергә ярҙам итә, сөнки ижад итеү тамамланмаған әле, беҙ барыбыҙ ҙа ошо процеста ҡатнашабыҙ. Был үҫеш процесында ҡатнашмаусылар, үҫешмәүселәр, деградацияға биреләүселәрҙән айырмалы, беҙ ҙә ижадсылар һәм үҙебеҙ йәшәгән тормошто яҡшыраҡ итеүселәр. Ижадсы булһағыҙ, төҙөүсегә түгел, ә емереүсегә ярҙам итер инегеҙме? Икеле.

Һеҙ төҙөүсе булһағыҙ, һис шикһеҙ, үҙегеҙгә ярҙам итә алаһығыҙ. Тимәк, йәшәү энергияғыҙ артыр, сәләмәт булырһығыҙ, һөҙөмтәлерәк эшләрһегеҙ, интуицияғыҙ һынатмаҫ, иң ауыр проблемалар ҙа еңел хәл ителер.

Малай велосипедтан ҡолай. Һеҙ уға ҡағынырға, ҡабат ултырырға һәм артабан елергә ярҙам итәһегеҙ. Ҡыҙыҡай, яңы күлдәк кейгәс, ояла. Һеҙ уға, принцесса кеүекһең, тип, маҡтау һүҙе әйтәһегеҙ. Фатирын һеҙгә ҡуртымға биреүсе аҡса алырға килә. Һеҙ уға, ҡайһы бер етешһеҙлектәргә күҙ йомоп, өйҙә ни тиклем яҡшы булыуын белдерәһегеҙ. Кешегә ярҙам итеүҙең төрлө ысулдары бар. Бының өсөн юл аша һуҡыр ҡарсыҡты етәкләп сығарырға тип көтөп тороу кәрәкмәй. Әммә ярҙам йылмайыу һәм ҡулбашҡа шапылдатып һуғыу ғына ла түгел.

Джорджина үҙенең бигүк уңышлы булмаған күршеһенең ҡыҙын уҡытыуға үҙ аҡсаһын түләй. Ул алмашҡа бер нәмә лә һорамай. Әммә изгелек изгелекте тарта, тигән Ғаләм ҡануны үҙ эшен башҡара. Уның профессиональ карьераһы барлыҡ өмөтөн аҡлай. Тимәк, Ғаләм, ҡоролош ҡанундарына ярашлы, аңлы рәүештә ярҙам күрһәтеүҙең хаҡын арттырып ҡайтара. Ул һаран түгел.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҺӘЙКӘЛДӘР КЕМГӘ?




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**23-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тараҡ. Яҡтыкүл. Ялҡын. Майҡы. Дауыт. Ҡыяр. Ми. Ашлама. Мөгөҙ. Туҙбаш. Ләкәп. Ҡыл. Өргөн. Ығыр. Надя. Шланг. Үңлек. Түрә. Таң. Ҡыр. Келәш. Балыҡсы. Йәй. Ата.

**Вертикаль буйынса:** Асылыкүл. Мулдаҡкүл. Медпункт. Яһаҡ. Алабай. Ыҡ. Тутыя. Ҡуян. Ҡылыс. Ҡарабалыҡты. Үркәс. Ҡолон. Ыҙа. Дим. Өршәк. Өтөр. Өлгө. Туҙ. Нөгөш.

*БАҠСА*

# ИЮНЬ АЙЫНДА...



**Июнь айы - емеш һәм емеш-еләк үҫентеләренең әүҙем үҫкән осоро, уларға тап ошо осорҙа күпләп һыу ҡойорға һәм туҡлыҡлы, бигерәк тә азотлы һәм калийлы матдәләр менән туҡландырырға кәрәк.**

Шулай ҙа һәр баҡсасы өсөн иң ябай һәм ҡул аҫтында булған ысул - ул органик ашлама. Бының өсөн бер өлөш тиҙәк һәм өс өлөш һыуҙы болғатырға һәм бер нисә көн әсетеп, тағы ла һыу менән аралаштырып, үҫемлектәргә ҡойоп сығырға кәрәк. Әсетелгән үлән бигерәк файҙалы буласаҡ, бының өсөн шулай уҡ бер өлөш үлән һәм өс өлөш һыу кәрәк.

Был ай сүп үләндәре менән көрәшеү мәле лә. Ваҡытында утап, сүп үләндәрен юл, канау ситтәренә һалығыҙ. Ул сереп, үҙенсәлекле ашламаға әүереләсәк.

Ҡоротҡостар менән көрәшеү өсөн баҡсалағы ағастарға һәм ҡыуаҡтарға һабын, ылыҫ йәки тәмәке болғатылған һыу һибеп сығығыҙ. Гәрсис, әсе әрем, меңъяпраҡ, еҙ төймә, томаттың ботаҡтарын төнәтеп һибеү ҙә файҙа бирәсәк. Зарар килтереүсе күбәләктәрҙе юҡҡа сығарыу өсөн ағас ботаҡтары төбөнә бер аҙ кеүәҫ, крахмал шәрбәте (патока) һалынған банкалар элегеҙ. Һәр иртә һайын ҡурай еләге һәм еләктәрҙең аҫтына туҡыма түшәп, ҡыуаҡтарҙы һелкетеп сығығыҙ һәм ҡоротҡостарҙы йыйып алығыҙ. Ҡурай еләгенең ҡоротҡостарҙан зыян күргән һарғайған ботаҡтарын ҡырҡып алып, яндырығыҙ. Июндә емеш ағастарының емештәре ҡойола, был туҡтатып булмаған тәбиғи биологик процесс. Уларҙы йыйып алып торорға онотмағыҙ.

Июнь башында айыу баланы (жимолость) емеш бирә башлай. Уңыштың 75 проценты өлгөрөп еткәс, уларҙы йыя башларға була, сөнки саҡ ҡына һуңлаһағыҙ, был эште һеҙҙең өсөн турғайҙар һәм барҡылдаҡтар башҡарып ҡуйыуы ихтимал.

Еләк ҡыуаҡтарының кәрәкмәгән мыйыҡтарын ҡырҡығыҙ, тамыр йәйҙерә торғандарын ергә күмеп, һыу һибегеҙ. Ер ҡоро булһа, еләктәргә һыу һибергә кәрәк, ә бына ул мыйыҡ ебәргәндә һәм уңыш өлгөргән осорҙа һыу һибергә ярамай.

Июндә ер өҫтөндәге өлөшө туңып, зыян күргән алмағас күп итеп йәшел үҫентеләр ебәрә башлай. Уларҙы төбөнән ҡырҡып ташлағыҙ. Июнь аҙағында крыжовник, ҡыҙыл һәм ҡара ҡарағатты үрсетә башлайҙар. Бының өсөн ҡыуаҡтан ботаҡтар киҫеп алаһың һәм тамыр үҫешен әүҙемләштерә торған шыйыҡсаларға, мәҫәлән, гетероауксинға 8-12 сәғәткә ҡуйып торорға. Аҙаҡтан уларҙы парниктарҙа тамыр йәйҙерәләр. Торф, ҡом өҫтәлгән тупраҡ яҡшыраҡ буласаҡ. Ботаҡтарҙы 1,5-2 см тәрәнлектә ултыртырға. Температура 18-20 градустан артмаһын, унан юғары күтәрелә башлаһа, мотлаҡ ышыҡ булдырырға кәрәк. Ботаҡтарҙы парникта тамыр йәйгәнсе тоторға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (3) дүшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 15 (4) шишәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:23 |
| 16 (5) шаршамбы | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 17 (6) кесе йома | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 18 (7) йома | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 19 (8) шәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 20 (9) йәкшәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# ҠОТЛАЙБЫҘ!



**Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәүсе ҡәҙерле апайым Фәннүр Миңнехәт ҡыҙы СОЛТАНҒОЛОВАНЫ юбилейы - 70 йәше менән ҡайнар ҡотлайбыҙ!**

...Апайым менән игеҙәктәр кеүек үҫтек: атай-әсәйебеҙ икебеҙгә бер иштән күлдәк-туфлиҙар һатып алыр ине; энә менән еп шикелле, апайым ҡайҙа - мин шунда булдым: бергә уйнаныҡ, бергә уҡырға, бергә эшкә өйрәндек. Йәш аралары ла ҙур түгел, мин ни бары ике йәшкә генә кесе, ләкин апайым минән һәр ваҡыт ике-өс башҡа яуаплыраҡ, аҡыллыраҡ, миһырбанлыраҡ, уңғаныраҡ булды - апай була белде. Дөрөҫө, был уның тәбиғәтендә ине, ул башҡаса була белмәне. Әле лә шул: нурлы, иманлы йөҙө һәр саҡ яҡты, асыҡ; ҡунаҡсыл өйөнөң түренән кеше өҙөлмәҫ; ашъяулығы тулы һый-ризыҡ, әлхәмдулиллаһ. Артабан да шулай булһын, тип теләйбеҙ. Фәннүр апайым оҙаҡ йылдар ауыл Советы идарасыһы булып эшләне, абруй ҡаҙанды, хөрмәтләп хаҡлы ялға оҙаттылар, ләкин ул, бөткөһөҙ йорт-хужалыҡ эштәре, туҡһанын үткән ветеран атайыбыҙҙы көн-төн эргәһенән китмәй хәстәрлекләүе, башҡа мәшәҡәттәренә ҡарамаҫтан, әле лә ауыл тормошо, йәмәғәтселек эштәре менән ҡайнап йәшәй: әүҙем ағинәйҙәребеҙҙең береһе, тирәйүндә билдәле "Фатиха" вокаль ансамбле ағзаһы; күп тапҡырҙар район конкурстары лауреаттары булдылар.

Ҡәҙерле апай! Иткән игелек ғәмәлдәрең үҙеңә бишләтә изгелек булып ҡайтһын. Һиңә иҫәнлек-һаулыҡ теләйбеҙ, бәрәкәтле, хәйерле ғүмер йылдары кисереп, балаларың, ейән-ейәнсәрҙәрең ҡыуанысына кинәнеп йәшәргә лә йәшәргә насип итһен Хоҙай. Беҙ һине яратабыҙ!

**Өфө ҡалаһынан Фәүзиә һәм Гөлфиә Мөхәмәтшиналар.**

✓ *Кешеләр үҙ аҡылындағы бушлыҡты йыш ҡына асыу менән тултыра.*
*(У. Олджер).*



ЙЫРСЫ ҠОЛАҒЫНА...

# ЙЫРҘЫҢ ЙЫРТЫҒЫ ЮҠ, ТИҺӘЛӘР ҘӘ...



– Китсәле, ошо ла булдымы йыр! Өйрәнеп алдылар шиғырҙы көйләп һөйләргә... - Матур йыр тыңлап, моңланып йөрөгән еренән, икенсеһе башланыу менән атайым, йәне көйөп, радионы һүндереп ҡуя.

- Беҙ бәләкәй саҡта бригадир әсәйемде эшкә саҡырып килә лә, һүҙен беҙ аңламаһын өсөн йырлап әйтә торғайны. Әсәй эшкә китеүен аңлап ҡалһаҡ, беҙ мыжый башлағанды белеп, Фәйзрахман ағай ошолар ише мөңрәп һөйләште, - уға әсәй ҙә ҡушылып китә.

Йырҙың йыртығы юҡ, тиһәләр ҙә, бөгөн уның сейле-бешле, өҙөк-йыртыҡтары сәхнәнән дә, телевидение-радионан да йыш яңғырай. Мин үҙем йырҙың һүҙҙәренә иғтибар итәм, сөнки уның мәғәнәһе көйгә түгел, ә тап һүҙҙәргә бәйле.

Беҙ үҫмер саҡта Фәнис Солтанғоловтың "Бәшмәк" йыры бик популяр булды, уның ни хаҡында икәне мөһим дә түгел ине, бугай, көйө дәртле булғас, йәштәр уны көн-төн тыңлап кинәнде. "Һине алып тоҙлайҙар, бешерәләр, ашайҙар", "Аяҡта килеп сыҡты бәшмәк" кеүегерәк һүҙҙәрҙән тора ул ижад емеше. Уның тағы ла береһенән-береһе мәғәнәһеҙерәк "Серәкәй", "Тәпешкә", "Кайтып кит, давай, давай" тигәндәре лә бар.

Бөгөн йырсылар күп, улар ана шул Фәнистең "бәшмәге" кеүек, ҡайҙандыр килеп сығып торалар, эстрадабыҙҙы береһенән-береһе мәғәнәһеҙ йырҙар менән тултыра торалар. "Иртәнгә сәғәт биштәрҙә мин һинә ҡуна барам", "Серле доньяндың ишеген ас әле, серле доньяна кистәрен ҡас әле" тигән һүҙҙәрҙе һәр кем үҙенсә аңлай торғандыр, моғайын. Мин иһә уларҙы бөтөнләй ҡабул итмәйем. Эстрадабыҙҙың сағыу пары үҙенең бер йырында "Һеймәгәнгә һөйкәлмәнек, сит йәрҙәргә һикермәнек" тип йырлай. Сәхнә йондоҙҙары ни хаҡында йырлағанын үҙҙәре ишетәме икән, тип уйлап ҡуяһың. Тамашасы уларҙы тышҡы ҡиәфәтенә, кейеменә ҡарап ҡына ҡабул итмәй бит, тәү сиратта, ни тураһында йырлауына иғтибар итә. Мәҫәлән, берәү "Һүндермәйек усаҡтарҙың ҡуҙ-көлөн" тип моңлана. Ул көлдөң тап усаҡ һүнгәндән һуң тороп ҡалғанын аңламай, күрәһең.

Татар телле авторҙарҙың йырҙарын башҡортсаға ауҙарып яңғыраткандар ҙа байтаҡ бөгөн. Бынын бер насарлығы ла юҡ, әлбиттә, тик һөйләшебеҙ өҡшаш булһа ла, һүҙҙәрҙең яҙылышы төрлөсә бит. Мәҫәлән, шул рәүешле кәмәбеҙ "көймә"гә әйләнеп китә, барайыҡ урынына "барыйк" килеп сыға.

Йәш йырсы "Күрешәйек, туғандар" урынына "Күрешәйек, тыуғандар" тип моңлана. Ике һүҙ араһындағы айырманы уға аңлатыусы кеше булмағандыр, күрәһең.

Бер һүҙҙе әллә нисә тапҡыр ҡабатлап, сәхнәне арҡырыбуй иңләгәндәр ҙә күбәйҙе хәҙер. Бер башҡарыусы ҡыҫҡа ғына йыр дауамында "яратам" һүҙен әллә 68, әллә 98 тапҡыр ҡабатлай. Махсус һанап ултырған инем, яҙып алмағас, хәҙер онотолған инде. Уйлап ҡараһаң, ул сәхнәнән ҡыҫҡыра торған (был осраҡта тап ҡысҡыра торған!) түгел, ә ике кеше араһында бик уйлап ҡына әйтелергә тейешле һүҙ.

Ҡуптәрҙең яратҡан йырында ошондай һүҙҙәр бар: "Күнелемдең күркен яулай алмай бер кем". Ундағы "түрен" тора-бара ни сәбәплер "күркен" булып китте лә, төҙәтелмәй ҡалды. Бөгөнгө йәш сәхнә йондоҙҙары ла уны шул хаталы көйөнсә башҡара.

Һанай китһәң, күп инде ул беҙҙә өҙөк-йыртыҡ, сейле-бешле йырҙар. Башҡорт эстрадаһының бәҫен торорлоҡ, мәғәнәле йырҙары менән тамашасы күңелен яуларлыҡ, тәрән мәғәнәле йырҙар башҡарған, үҙ эшенә яуаплы ҡараған сәхнә йондоҙҙарыбыҙ ҙа бар беҙҙең. Уларҙың бөтәһен дә бер ҡалыпҡа һалып ҡарау һис дөрөҫ түгел. Тик һүҙ, аңлауығыҙса, улар хаҡында булманы.

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# ТЫУҒАН ҠАЛАМА ЙЫР

*Назар НӘЖМИ*



Көмөш ҡайыш быуған егет кеүек,
Ағиҙелде урап биленә,
Баҫҡанһың һин, Урал һаҡсыһындай,
Тыуған Өфөм минең, бергенәм...

Хәтеремдә, юл тоҡсайы аҫып,
Беренсе ҡат, ғүмерем таңында,
Ҡанатланып ҡуҡҡә менгән кеүек,
Менгәйнем мин һинең тауыңдан.

Ҡупме йылдар артта ҡалған хәҙер,
Тик һиҙмәнем ғүмер үткәнен,
Сөнки мине үҙең кеүек бейек
Тормош тауҙарына күтәрҙең.

Туған әсә улын оҙатҡандай,
Киткән саҡта ҡарап ҡалаһың.

Ҡайтҡан саҡта, һин алыҫтан күреп,
Ҡосағыңа тартып алаһың.

Бер генә көн күрмәй торһам да мин,
Күңелдәрем һинһеҙ бойоға.
Һинән китһәм, хатта таштарың да,
Сәскә аткан тәсләө тойола.

Әллә башлап һиндә күргәнгәме
Яҡты ғүмеремдең яҡтыһын,
Әллә инде һиндә эскәнгәме
Эскән һыуҙарыңдың татлыһын,
Йөрәгемә бигерәк яҡынһың.

Эштән арып ҡайтҡан саҡтарымда,
Яҙа алмаған саҡта йырҙарҙы,
Баҫҡан ерҙән һүҙҙәр эҙләгәндәй,
Урамдарың буйлап уйланып,

Мин һәр көндө үтәм. Бары ла таныш:
Һәр бороломаң, урам саттарың.
Бары ла таныш, хатта таштарыңдың
Беләм ҡайҙа, нисек ятҡанын.

Күҙ алдымда ағастарың үҫте,
Бейек йорттар теҙелеп баҫтылар.
Күҙ алдымда ҡайнар асфальттарың
Урамдарға ятты ялтырап.

Баҡсаларың суйын ҡойма кейҙе, -
Мин уларға ҡарап һоҡланам.

Һәр бер сәскәң мине ҡыуандыра,
Һәр биҙәгең өсөн шатланам.

Һөйөм, ҡалам, һинең шау-шыуыңды,
Машиналар, гудок тауышын,
Дим буйҙарын, йырҙарыңдың моңон,
Ағиҙелдең тымыҡ ағышын.

Йүкәләрең сәскә атҡан саҡта,
Йәйге кистә хуш еҫ аңҡыуын.
Йондоҙҙарың яҡтылығын күмеп,
Төнгө уттарыңдың балҡыуын.

Ҡайҙа барма - таныштарҙы күрәм,
Иптәштәрем һиндә, дуҫтарым.
Һәр бер кешен үҙең кеүек яҡын,
Яғымлыраҡ кеүек ҡыҙҙарың.

Һөйәм һине унған батыр итеп,
Ғорурланам һинең даныңа.
Ағиҙелең барып ҡушылғандай,
Дингеҙ тулҡындары шауына.

Хеҙмәтенде Ватан ҡеүәтенә
Ҡушып, бергә һин тын алаһың,
Һәм һин ерҙә Тыуған илдең яҡты
Бер йондоҙо булып янаһың!

Һиндә көс, һиндә хеҙмәт,
Һиндә кешегә хөрмәт,
Һиндә йыр, һиндә илһам,
Эй Уфам, Уфам, Уфам!

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӘКӘ ҺӨҘӨП...

## тауҙы ауҙара алмаҫ

Яҡшы ауыҙға аш тейер, яман ауыҙға таш тейер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Зоопарк - кеше булырға өйрәнеү өсөн бынамын тигән урын.

**(Эван Эзер).**

Бөйөк эштәргә хеҙмәт иткән кеше был эштәрҙе үҙенә лә хеҙмәт иттерә ала.

**(Томас Элиот).**

Ас кешене ашатҡың килһә, уға балыҡ бир. Ас кеше бер ваҡытта ла асыҡмаһын тиһәң, ҡулына йылым тоттор.

**(Генрих Гейне).**

Кешеләр үҙ аҡылындағы бушлыҡты йыш ҡына асыу менән тултыра.

**(У. Олджер).**

Эш урыныңды ваҡытында ҡалдырыу кәрәк. Ижадының һүрәнләнә башлауын тамашасы тоймаҫ элек сәхнәне ҡалдырған балет бейеүсеһе һымаҡ.

**(В. Оствальд).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Йософ исемле йәһүд крәҫтиәне йәшәгән. Уның бер эште эшләгәнсе, ниндәйҙер ҡарар ҡылғансы, иң тәүҙә оҙаҡ итеп уйлай, фәлсәфәүи һығымталар яһай торған ғәҙәте булған. Бер ваҡыт ул бойҙай һатырға тип ҡалаға баҙарға китергә йыйына башлай. Китер алдынан: "Бойҙайҙы һатып бөткәс тә мин һиңә телеграмма һуғырмын", - ти оҙатырға сыҡҡан ҡатынына. Бына ул баҙарға барып етә, бойҙайын уңышлы ғына һатып бөтә лә почтаға йүнәлә. Телеграммаға: "Бойҙайҙы һатып, арыу ғына аҡса эшләнем. Иртәгә ҡайтам. Яратам һәм үбәм. Йософ", - тип яҙа һәм... уйға ҡала. "Тукта, ниңә мин "Бойҙайҙы һатып, арыу ғына аҡса эшләнем", тип яҙам әле? Бойҙайҙан башҡа тағы нимә һатайым мин, унан һуң, бойҙайҙы арыу ғына аҡса эшләү өсөн һаталар инде, быны ҡатыным былай ҙа белә..." - тип уйлай Йософ һәм телеграммалағы тап ошо һүҙҙәрҙе һыҙып ташлай. Шунан телеграммаға яҙған һүҙҙәрен янынан ҡарап сыға һәм шулай тип фекер йөрөтә башлай: "Ниңә "иртәгә ҡайтам" тип яҙҙым әле? Мин шунан да һуңға ҡала алмайым да инде. Быны ҡатыным былай ҙа белә..." - ти ҙә, был һүҙҙәрҙе лә һыҙып ташлай. Тексты артабан уҡый һәм көлөп ебәрә: "Ни өсөн мин "Яратам һәм үбәм" тип яҙырға тейеш һуң әле? Ул бит минең үҙ ҡатыным, яратҡанды былай ҙа белә. Тыуған көнө булһа, шулай тип яҙғанда ла булыр ине..." - ти ҙә, телеграммалағы был һүҙҙәрҙе лә һыҙа. Телеграммала "Йософ" тигән генә һүҙ ҡала. "Һин нимә, ҡатының һинең Йософ икәнеңде былай ҙа белә бит инде..." - ти Йософ һәм был һүҙҙәрҙе лә һыҙып ташлап, телеграмманы йыртып, аҡсаны янында ҡалдырыуынан бәхетле булып, почтанан сығып китә..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21024

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23
**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 июнь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3400
Заказ - 375/05